# А к с а т у б е

Бынан ике йөҙ йылдар элек булған был хәл. Ул заманда Айбағыш тигән бер батыр йәшәй. Ул тирә якта дан тоткан бик тә мәргән һунарсы булып, хатта биш сакрым ерҙән дә теләһә ниндәй йәнлекте атып алыр була.

Бер сак шулай йәйләүҙә ятканда, Айбағыш йәйләүенә йылкы көтөүсеһе сабып килә лә:

- Бөтә йылкы өйөрөн казактар кыуып алып китте,- тип хәбәр һала.

Айбағыш шунда, тиҙ генә үҙ егеттәрен йыя һалып, былар артынан кыуып китә. Казактарҙың Акса исемле батыры, арттан кыуғын төшкәнен күреп, күҙәтеүселәрен калдыра ла үҙе ике йөҙләп һыбайлы менән, өйөрҙө әйҙәп, ары китә.

Айбағыш та егеттәрен Бөркөтөн тауына йәшереп, үҙе теге күҙәтселәр өҫтөнә барып баҫа. Бөтәһен дә "һә" тигәнсе кырып һалғас, инде Аксабатырҙың үҙен дә кыуып етә. Айбағыштан тегеһе кем икәнен һорашкас, быныһы йәшермәй әйтеп бирә. Шунда Аксабатыр, үҙенең даны сыккан юлбаҫар икәнлеген белдереп:

- Донъяла миңә каршы торорҙай башка батыр юк әле,- тип купыра.

Тик был купырышка Айбағыштың иҫе лә китмәй, һаман үҙенекен ныкыша:

- Йылкы өйөрөн башкорттарға кайтарып бир,- ти.

Шул сак Аксабатыр, һаҙағынан уғын һурып, Айбағышка атып та ебәрә. Ә Айбағыш үҙенә осхан укты иҫкып ала ла, укты алтыға ярып, алтыһын да кире ата. Уктарҙың бөтәһе лә Аксабатырҙың кендегенә каҙалып, был шунда ук йән бирел, ергә ауа.

Калған ҡаҙаҡтар, тырым-тырағай килеп, ҡаса башлай, тик Айбағыштың егеттәре уларҙы ҡыуып етеп быран-заран килтерә. Бер икеһе генә ҡасып ҡотола.

Айбағыш Аҡсабатырҙы Үрге Яйыҡ менән Истамғол ауылдары араһындағы түбәләскә мендереп ерләй ҙә, йылҡыларын кире әйҙәп, ҡайтып китә. Ана шул заманда бире был тау Аҡсатүбә тип йөрөтөлә...

## 30. Юлкерәшкән тау

Был хәл 1744-се, 1745-се йылдарҙа була. Ул сакта кантон башлығы булып Каһарман кантон тора.

Данлыклы бер байҙың ҡыҙын кейәүгә биреп, тау итәгендә туй үткәреп яталар икән. Туй бик ҙур, һабантуй һымак була: батырҙар, көрәшеп, көс һынашалар. Казак яғынан килгән бик көүәтле бер батыр Төмәстең бөтә батырҙарын да алып ташлағас, кантон башлығы оятынан нишләргә лә белмәй. Быны күреп торған бер ялсы кол, батырға ҡаршы сығып, көс һынашып карарға рөхсәт һорай. Кантон башлығы быға көлөп кенә ҡуя. Шулай ҙа атка атланған кол, майҙан уртаһына сығып, ҡаҙаҡ батырын бер уратып ҡарай ҙа, эйәренән һикереп төшөп, теге менән алыша ла башлай. Биленән кысып ала ла тегене күтәреп ергә ташлай. Кантон башлығы, шатлығы эсенә һыймай, кол янына югереп килә лә, яурынына елән ябып:

– Кыҙ һинеке, үҙенде иреккә ебәрәм. Һин беҙҙең кантондың намыҫын һаклап калдың,– ти.

Шул көндән алып был ерҙе Юлкерәшкән тау тип йөрөтә башлайҙар.

## 31. Ҡыҙҙар тауы

Был тирәлә, Ҡариҙелгә ҡойған Йөрүҙән буйында, Бүгәс менән Салауат яуы ваҡытында шундай бер хәл була.

Көндәрҙән бер көндө, Елдәк крепосенан ҡайыҡ менән үрләп, Әсит тигән башҡорт ауылына әбей батша казактары килеп туҡтай. Ауыл буйлап, өй беренсә таралышҡас, былар аҙыраҡ эсеп тә ала-лар. Араларында ҡыйышыраҡ төйәгәндәре лә була. Ныҡ ҡына ҡыҙып алған ике казак Көҫәмбәт тигән бер ҡарттың өйөнә инеп, быны бик һылыу ике ҡыҙына бәйләнә башлай. Ҡыҙҙар менән кәмәлә йө-рөп килмәксе булалар. Көҫәмбәт ҡарт уйға ҡала. Тик былар һама-ман ай-вайына ҡуймағас, ҡарт риза була.

- Ярай, тик мин әбейемде лә алып сығайым инде,- ти былар-ға.

- Әйҙә, әбейең менән үҙең дә серләшерһең,- тип көлөшә был иҫәректәр.

Көҫәмбәт ҡарт,әбейе менән ҡыҙҙарын кәмәгә ултыртып, үҙе ишкәк төбөнән урын ала. Тик әлеге ике иҫәрек кәмәгә һикерергә генә иткәндә, был тиҙ генә кәмәһен ярҙан этә һалып, бар көсө-нә ишкәген ишә башлай. Тегеләр кәмә артынса шаптыр-шоптор һыу-ға барып төшә. Пистолеттарын һурып алып, атырға итһәләр, пис-толеттары атмай ҙа ҡуя.- дарылары һыуланған икән...

Шулай итеп, Көҫәмбәт ҡарт өй эсе менән ҡасып ҡотола. Кәмә менән Йөрүҙән тамағына хәтле үрләгәс, аҙаҡ Йөрүҙән үренә уң-ға ҡайырылалар. Ә Йөрүҙән үрендәге Ташауыл, Иҙелбай, Мәхмүт, Күҫә ауылдарын уҙғас, Мырҙалар Арҡауылы тигән бер башҡорт ауылы бар. Ауылдың һыртында ғына ҙур бер һаҙлы күл ята. Кө-ҫәмбәт ҡарт үҙенең әбейе, ҡыҙҙары менән ошо һаҙлы күл буйына

барып етә лә, тал-камыш араһында кыуыш короп, яу-дау баçылғансы шунда качып йәшәй. Кыҙҙар, якындағы тау битенә сығып, еләк йыйып төшә, Көçәмбәт карт һунарға йөрөй, мурҙа һала. Аҙак, яу-дыу баçылғас кына, бөтәһе лә үҙҙәренең Әсителә кайтып китәләр.

Бына шул замандан бире был һаҙлы күлде Әсе һаҙы йә кыҙҙар күле тип, ә күл әргәһендәге еләк йыйған тауҙы кыҙҙар тауы тип йөрөтәләр. Шунда ғына Көçәйбәт тауы менән Көçәмбәт йылғаһы ла бар.

Мырҙағол тауы

Беҙҙең Ҡаҙыш ауылынан өс саҡрым ерҙәге Мырҙағол тауында Бүгәс менән Салауат заманынан ҡалған боронғо бер ҡәбер ҡалҡып тора.

Ул замандарҙа беҙҙең тирәлә Мырҙағол тигән бер батыр булып, Салауат ғәскәрендә һуғышып йөрөй. Яу баҫтырылғас, Мырҙағол мал-тыуарын ҡыуып алып китә лә үҙенең Шәһәрбоҫтан, Гөлбоҫтан тигән ике ҡыҙы менән ошо тау итәгендәге урманда ҡасып ята. Әбей батша һалдаттары уны эҙләп йөрөй торғас, бер саҡ шулай ул ҡасып ятҡан Уралтау һыртына барып сығалар. Шунда Мырҙағолдоң бер үгеҙе үкереп ебәрә лә һалдаттар быньң ҡайҙа ятҡанын белеп ҡалалар. Шәһәрбоҫтан менән Гөлбоҫтан тау аҫтындағы күлгә төшөп, ауыҙҙарына ҡурай-ҡамыш ҡабып, күл төбөндә ҡасып ята, ә Мырҙағол үҙе һалдаттар менән алыша. Уның ни бары егерме уғы ғына тороп ҡалған була, ә уны эҙәрләп килгән һалдаттар егерме бер кеше булып сыға. Улар тау итәгенә килеп еткәс, Мырҙағол уларҙың егермеһен атып үлтерә, ә һуңғыһына уғы етмәй ҡала. Был һуңғы һалдат үҙе Мырҙағолдоң башына етеп, мал-тыуарын кире бороп алып китә. Ҡыҙҙар аҙаҡ, күлдән сыҡҡас, Мырҙағолдоң кәүҙәһен таш менән уратып, урыҫ мейесе һымаҡ итеп күмәләр.

Батыр иҫтәлегенә тауҙы Мырҙағол тауы тип атайҙар, ә ҡыҙҙар ҡасып ятҡан күлде Шәрбоҫтан /Шәһәрбоҫтан/ күле тип йөрөтә башлайҙар.

# Ар ташы.

Бәҙҙән алыҫ түгел бер ҡая бар. Уны Ар ташы тип тә, Бүгәс ташы тип тә йөрөтәләр. Имеш, был таш аҫтында Бүгәс батша ҡоралдарын йәшергән. Ә ҡоралдары бик күп булған, тиҙәр.

Борон Ағиҙел хәҙерге йырҙаһынан ағмай, башка урындан ағып ятҡан. Ошо иҫке йырҙа буйлап китһәң, Ар ташына барып сығаһың. Элек был тәңгәлдән Ағиҙелдә бүрәнәләрҙән юнып эшләнгән ҙур-ҙур баркалар - ҡайыҡ-кәмәләр йөҙөп йөрөгән. Уларға тимер,күмер, руда тейәп ағыҙыр булғандар.

Бүгәсәү яуы ваҡытында уға ҡаршы әбей батша генералы Арский тигән берәү ғәскәре менән килеп, ошо Ағиҙел ярында бик ҡаты һуғыш булған, тиҙәр. Арскийҙе үлтереп, ошо ҡая башынан Иҙелгә ырғытҡандар, имеш. Шуға уны Ар ташы тип тә йөрөтәләр.

# Бугәс менән Салауат ташы

Беҙҙең Исмаҡай ауылы тирәһендә, Әуҙән менән Туҡан юлы буйында, бер тау бар. Шул тау башында мүк баҫып бөткән бер таш ята.

Ташта ат тояғы менән колон тояғының эҙҙәре уйылып ҡалған. Имеш, ҡасандыр Емельян Пугачев менән Салауат Юлаев, үҙ ғәскәрҙәренә юл ҡарап, ошо таш өҫтөндә һыбай торғандар.

Ҡарттар, тояҡ эҙе Салауат батырҙың колонлаған бейәһе менән колононан тороп ҡалған, имеш, тип һөйләй торғайнылар.

# Бүгәс тауы

Наурузс ауылынан алыҫ түгел Һатты юлы буйында бер тау бар. Уны Бүгәс тауы тип йөрөтәләр.

Имеш, Пугачев үзенең ярҙамсылары менән, артабан ҡайҙа юл тоторға, тип, ошо тау башында кәңәш ҡорған.

## Бүгәс түбәсәйе

Беҙҙең оләсәй Ағиҙел арьяғындағы анау түбәсәйҙе, Бүгәс ғәскәренән ҡалған, тип һөйләй торғайны.

Имеш, Бүгәс ғәскәре уны кәпәс менән ар ташып өйгән. Шуға ла ул әле һаман ер менән тигеҙләнмәгән. "Бүгәс ғәскәре, ай-һай, ҙур булған икән шул!" - тип ҡуя торғайны оләсәйем.

## Чика-тау

Яйык-йылға буйында, Кыҙыл ауылы артында, кылған дала уртаһында Чика тигән бер тау бар. Ҙур ҙа түгел, бик бәләкәй ҙә түгел - йөҙ сакрым ерҙән үк күренеп тора. Ә исеме уның бына кайҙан килеп сыккан.

Борон-борон, әле беҙҙең атай-олатайҙарға саклы, уҙ яугирҙәре менән был тирәлә Чика Зарубин кушаматлы, Иван исемле бик кыйыу бер Яйык казагы йөрөгән. Тал сыбыктай һомғол һынлы, бик тә зирәк акыллы, көндәй якты йөҙлө, балдай татлы һүҙле дан ир-арыҫлан булған ул: ярлы-ябағайға - шәфкәтле, дошмандарға дәһшәтле булған. Емельян Пугачты ишетеп беләһегеҙҙер бит? Бына ул уның уң кулы булып йөрөгән. Емельян - батша, ә Чика - граф урынына. Быныһы инде һүҙ ыңғайында ғына сыккан һүҙ. Ә инде хак-дөрөҫөн әйткәндә, ярлы халыкты яклап яу күтәргән улар. Кук үләнкәй көн яктыһына күтәрелгәндәй, халык та бит якшылыкка, ятылыкка тартыла. Бына шулай улар янына ла ярлы-ябағай казактар, сәкмән-сабата кейгән мужиктәр, башын эймәҫ башкорттар, кыйырһытылған кырғыҙҙар менән мәрҙән әҙләп, күмер уртәп, корос койоп, урман киҫеп, ыҫмала кайнатып йөрөгән бөтә тау-заут оҫталары ағылып килгән.

Бер вакыт шулай ошо бейек тау янында яу кайтарған Чика. Ғәскәре бының бик ҙур булған, әбей батша һалдаттары уларҙан да куберәк булып сыккан. Өс көн, өс төн буйы алыш-һуйыш барған. Яу һөрөненән тау геү килеп торған. Көн менән төн, төн менән көн алышынған. Ялкынды һалкын, һалкынды ялкын баҫкан. Яғандар ҙа туңғандар, ауғандар ҙа торғандар, ә алыш һаман туктамаған, оторо кыҙа ғына барған. Суйын йөҙрә

аткан тутары ажғырып, кыҙған башкорт уктары һыҙғырып торған. Аттар сабышкан, абатырҙар алышкан. Кан һаркып яткан ерҙә анктар ҙа тояктар ҙа тайған. Кан даръя булып аккан. Дуртенсе көн тигәндә генә батша ғәскәрҙәре кире сигенгән.

Яуҙан һуң Чика тауҙың эңкыйына баҫып карап торған, үҙе тыуып килгән көнгә бағып, мыйык борған. Был тауҙың исеме лә бына шунан калған.

аткан тутары ажғырып, кыҙған башкорт уктары һыҙғырып торған. Аттар сабышкан, абатырҙар алышкан. Кан һаркып яткан ерҙә аяктар ҙа тояктар ҙа тайған. Кан даръя булып аккан. Дуртенсе көн тигәндә генә батша ғәскәрҙәре кирә сигенгән.

Яуҙан һуң Чика тауҙың ослокойына баҫып карап торған, үҙе тыуып килгән көнгә бағып, мыйык борған. Был тауҙың исеме лә бына шунан калған.

Бүгәсә/ юлы

Нуғайбәк ауылы тирәһендә бер юл бар. Уны Пугачев кешеләре һалған, тиҙәр. Юлға арҡыры ер өйөмө ята. Был урында элек йырын булған. Шул йырынды аша сығырға, тип, Пугачев кешеләрҙе уға бүрек менән ер ташыған, имеш.

Был өйөм ана шунан тороп ҡалған.

Юлды тора-бара урман баҫып киткән. Тик 1958 йылда ғына юлды таҙартып, яңынан йөрөй башлағандар.

# Салауат күпере

Һүрән ауылынан йырак түгел бер күпер бар. Уны Салауат күпере тип йөрөтәләр. Ниңә тиһәң, был урында ике йөз йыл элек Салауат Юлаев ҡушыуы буйынса Һүрән аша ҡайын күпер һалынған. Шул күперҙән арьяҡҡа Пугачев ғәскәренең туптарын сығарғандар икән.

# Салауат мәмерйәһе

Йөрүҙәнгә ҡойған Һелекле Йылғаһының ҡаялы ярында Салауат мәмерйәһе бар. Салауат батыр унда батша һалдаттарынан йәшеренеп ятҡан, тиҙәр.

Мәмерйәгә, йылан һымаҡ бормаланып, текә яр башынан ҡая битен яғалап бер һуҡмаҡ үтә. Был – Салауат һуҡмағы. Оҙонлоғо йөҙ илле аҙымдай ғына. Тау ҡыуышына Салауат ошо һуҡмаҡ буйлап менеп йөрөгән.

Ҡатау заутына ингәндә, крепостной эшселәр Салауатты икмәк-тоҙ менән ҡаршы алғандар. Бик күптәре Салауатҡа ҡушылып киткән. Шуға күрә, Салауат отолоп, хөкөм ителгәс, Ырымбур суд палатаһы уны, халыҡ асыуынан ҡурҡып, Ҡатау-Тамаҡ крепосендә язалап йөрөтөүҙе лә тыйған була.

# Митрошка ташы

Элек, һыу ташкан сактарҙа, Ағиҙел буйлап Әүжәндән алып Өфөгәсә кайык-баркалар менән суйын ташый торған булғандар. Һәр кайыкка алтмышар-етмешәр тонна суйын тейәгәндәр. Кайыктарҙың оҙонлоғо егерме биш-утыҙ сажингә еткән /йөҙ ҙә егерме метр самаһында/. Кайыктар ағын тау йылғаһы буйлап тыныс акһын өсөн, хлур уларҙың койроғона тукһан-йөҙ егерме ботлок суйын батырғыстар /лоттар/ аҫып куйыр булғандар. Юкһа улар кая-таштарға каклығып, кыйралып бөтәр ине. Был батырғыстарҙан тыш, һәр кайыкка һикһәнешәр ботлок саталы ырғак-якорь ҙә эленгән. Һәр кайыкты утыҙлап кешенән торған эшселәр командаһы оҙата барған. Кайыктар карауаны менән бергә Ағиҙел буйлап аҙык тейәлгән йөк кәмәләре лә ағып барған.

Боронорак Ағиҙел буйында был кайыктарҙы имен-аман йөрөтөүсе бик оҫта койроксолар - лоцмандар ҙа күп булған. Улар араһында бигерәк тә Митрошка исемле лоцман дан казанған, тиҙәр. Шуға күрә Әүжән заутының хужаһы Демидов уға бер-нисә мәртәбә киммәтле бүләктәр ҙә биргеләгән.

Бер сак шулай Митрошка, бик мактанып китеп, Ағиҙел буйлап теләһә ниндәй барканы ла төшөрә алам, тип бәхәс тоткан икән. Заутсыға килгән дә:

- Миңә суйын тейәлгән кырк сажинле барка бирегеҙ, - ерәнә илтеп еткерәсәкмен,- тигән был.

Шулай итеп, Әүжән-Петровск заутында кырк сажинлек ҙур кайык эшләйҙәр. Митрошка менән килешеү төҙөшәп, хужа үҙенең ошондай шартын куя.

- Әгәр ҙә ерәнә илтеп еткерә алһаң, ҙур бүләк алырһың, ә инде кулыңдан килмәһә, яҙаһын алырһың,- ти.

Суйын тейәлгән бындай ҙур барканы иҫән-һау илтеп еткерә алырмы, юкмы, тип, башка лоцмандар ҙа бәхәскә инә.

Тәүәккәлләй ҙә китә Митрошка. Яман Шаршы тигән иң хәтәр һуңғы ҡаяға хәтле ҡайығы имен генә барып етә.

"Бына бит, һуңғы ҡая ла артта ҡалып бара, тиҙҙән инде иркен дала китәсәк[I]," - тип, шатлығы эсенә һыймай Митрошканың. Шунда ул, скрипкаһын алып, яратҡан көйөн һыҙҙырып ебәрә. Бөтәһе лә йылмайып уға ҡарай. Ҡапыл шул саҡ ҡойроҡ юнәлешен юғалтып, ҡаты ағымҡ ҡайыкты ситкә ҡайыра. Митрошка уны зырлап ятҡан өйөрмәнән сығарырға өлгөрмәй ҡала - ҡайыҡ, бар көсөнә ташҡа һуғылып, селпәрәмә килә. Шулай ҙа Митрошканың үҙе менән ҡешеләрен ҡотҡарып алып ҡалалар.

Тик асыуы сығырынан сыҡҡан хужа ярҙамсыһы менән зауыт приказчиктәре Митрошканы тотоп алып, ошо ҡая башына менделәр ҙә тукмап үлтерәләр. Ә ҡая башында ҡәбер ҡаҙырлыҡ та ер булмай. Митрошканың ҡанға батҡан кәүҙәһен таш менән уратып ҡүмәләр.

Был таш өйөмө хәҙер һыу өҫтөнән унбиш-егерме метр бейеклеккә күтәрелеп, сурайып сығып тора. Шунан бирле был Яман Шаршы ташын Митрошка ташы тип йөрөтәләр.

Ағиҙел буйлап һуңғы ҡайыҡ ҡарауаны Әүжәнден түбәнгә 1923 йылда оҙатыла. Уларҙың алтыһы Муйнаҡ-таш эргәһен-

---

[I]Митрошка ташынан өс саҡырым самаһы аҡҡас, ҡап-тауҙар дала тигеҙлеге менән алышына.

дә һәбеп калып, кыш буйынса шунда ултыра. 1924 йылғы ҙур яҙғы ташкында, уларҙы күтәреп, сыртлан ауылына саклым ағыҙалар. Унда еткәс, суйынын бушатып, артабан ат менән ташыйҙар.

Революциянан һуң юлға кертә булып яткан Митрошка ташын шартлаталар. Унан тик яман шаршыға уң як ярҙан оташып яткан кая менән ошо хикәйәт кенә тороп кала.

# Өс туған бусағаһы

Ағиҙел буйында, Бөрйәндән түбәнерәк ятҡан Ишдәүләт ауылы тәңгәлендә, сак-сак ҡына ҡырсын таш ҡаплаған бик хәтәр өс таш бар.

Ҡасандыр, был таштарға ҡаҡлығып, өс бер тыуған һалсының һалдары ҡыйралған икән. Шул саҡта батып үлгән һалсылар иҫтәлегенә был таштарҙы "Өс туған" тип атағандар.

Бик күп замандарҙан бирле Ағиҙелдәге ошо "Өс туған" буҫағаһынан һалдарын йәки ҡайыҡтарын иҫән-һау алып сыҡҡандар ғына оҫта һалсы йәки боцман тип аталыр булған.

# Кәбәнташ йәки Байыш ташы

Кесе Акбулат ауылынан сак кына үрҙәрәк, Ағиҙелдең уң як ярында Кәбәнташ тигән бер ак кая калкып тора. Ошо бейек кая хакында Акбулат башкорттары былай тип һөйләй торғайнылар.

Имеш, был тирәлә Байыш тигән арҙаклы бер кеше йәшәгән. Ул үҙенең бик намыҫлы булыуы менән абруй тоткан. Үҙ һүҙендә нык торғанға "Байыш һүҙ әйттеме, бөттө: әйткән һүҙе - аткан ук",- тигәндәр. Ир һүҙенең ныклығын ошо бейек Кәбәнташ менән тиңәр булғандар. Ысынлап та, ир-ат һүҙе - үҙе бер ат бит ул.

Байыш үҙе үлгәс, Ағиҙел ярындағы ошо кәбәнгә окшаш каяны Байыш ташы тип атап алып киткәндәр.

## Аҡ Һыйыр

"Атайсал" тигән бөрйән хикәйәтен ишеткәнегеҙ бармы? Бапсаҡ батырҙы үлтергән Ҡаракөлөмбәттән атаһының ҡонон алған Күҫәкби хаҡында ул хикәйәт. Әнә шул хаҡта һөйләгәндә, Аҡһыйыр менән Ҡараһыйырҙы ла телгә алалар. Имеш, Күҫәкби атаһының үсен ҡайтарғас, уны башта Аҡһыйыр арҡаһына атландырып мәсхәр итә. Ошо ер Аҡһыйыр тип аталып ҡала. Ә Ҡараһыйырға атландырып, Ағиҙел кисеүен аша сыҡҡан ер Ҡараһыйыр тип йөрөтөлә. Ағиҙел кисеүендәге был Ҡараһыйыр ташы бик хәтәр таш, һалың уға һуғылһа, яҡшылыҡ көтмә - тарала ла китә. Һүлгән таш мәмерйәһенән саҡ-саҡ түбән дәрәк ятҡан был мөгөҙлө аҡ таш ысынлап та һыйырға оҡшаған. Шуға күрә рустар ҙа уны "Коровушка" /"Һыйырҡай"/ тип атап йөрөтә.

# Муйнакташ

Ағиҙел буйлап түбән киткәндә, Акбута ауылынан һигеҙ сакрым самаһында ғына уң як ярҙа Муйнакташ тигән ҙур бер кая күренә. Акбута яғынан һалда ағып килгәндә, уның һыны ысынлап та эт кифәтендә һымак. Был кая тәңгәлендә Ағиҙел киҫә боролоп китә лә, ошо боролманы үткәс, ап-ак булып ике ҙур таш бағана калкып сыға. Береһе-уның ибәтәйһеҙ ҙур, ә икенсеһе уның калынырак - орсок ише ослайып барып бетә. Олоһонон ос тәңгәленәнерәк ак һыҙат каймалап алған. Ак муйын һымағырак булып тора. Шуға ла,бәлки, муйыны ак таш тигәндәрҙер әле. Муйыны ак булһа ла, әлегерәк уға кайык-һалдар йыш бәрелгәндә, бик ак булып күренмәгәндер.

Муйнак тигән эт кушаматлы ла бар уның. Был хакта былай тип тә һөйләйҙәр. Имеш, касандыр был тирәләге бер һунарсының Муйнак тигән бик шәп эте булған. Бер сак шулай был бер боланды баҫтырырып килә икән. Болан, куркыуынан нишләргә лә белмәй, ошо каяға аҫылып менә. Ә эт, уның артынан сабып килеп, ярһыуынан туктай алмай, кая башынан Ағиҙелгә осоп барып төшә. Һунарсыға һәләк булған эте бик йәл булып китә лә был ташты уның кушаматы менән Муйнактай тип атай, имеш.

Был һүҙҙәрҙең кайһыһы дөрөҫтөр, тик барыһы ла ысын һымак. Ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ барып карағыҙ.

## Һарыбаш-таш

Муйнакташ бер сакрымдай ары киткәндә, Ағиҙелдең уң яҡ ярында тағы бер таш күренер. Уның тупаҡ түбәһен ерән-һары мүк ҡаплағанға күрә, был ташты Һарыбаш-таш тип тә, Ерәнбаш тип тә йөрөтәләр.

Бынан бик күпә замандар элек, был таш тирәһендәге башҡорт ауылында ерән сәсле бер ҡыҙ бала тыуған, имеш. Башҡорттарҙа һары йәки ерән сәсле балалар бик һирәк тыуғанлыҡтан, мулла был баланы уйнаштан тыуған тип ҡарғап, әсәһен ҙур гонаһ ҡылған, тип ғәйепләй. Ә атаһына ҡыҙын ошо ҡая башына илтеп ташларға ҡуша. Мулланы тыңламай ни хәл итһен, атаһы үҙ ҡыҙын мәңгегә ошо ҡая башына ташлап ҡайта.

Бына ошонан ҡалған, имеш, ул Һарыбаш-таш.

# Аҙанташ йәки аҙан ҡысҡырған таш

Ырғыҙлы ауылынан аҫтарак, Ағиҙелдең һул як ярында мәсет манараһына оҡшаш Аҙанташ тигән бер ҡая бар.

Ҡасандыр, бик борон заманда, Йомағужа башҡорттары үҙенең мәсете менән дан тотҡан Мәсетле ауылына, хәҙерге Ютан ауылына, ураҙа байрамына барырға тип сыҡҡандар, имеш. Тик, ни эшләптер, юлда тотҡарланып, былар Мәсеткә барып етергә һуңлап китәләр. Инде ни хәл ҡылмаҡ? Бына шул саҡ мәсет манараһына оҡшаш ҡаяны күреп ҡалалар ҙа, шул ҡая башына ғына менеп, ғибәҙәт ҡылмаҡсы булалар. Манараһы булғас, аҙансыһы ла табыла!..

Ысын булғандырмы был хәл, юҡмы, уныһын аллаһы тәғәлә үҙе генә белә... Шулай ҙа ҡая һаман "Аҙан ҡысҡырған таш" булып тора бирә...

## Һандыҡташ йәки Исламғол ҡурай тартҡан таш

Ағиҙелдең уң ярында, Муйнаҡташ менән Аҙанташ араһында, һандыҡҡа оҡшап торған ҙур бер ҡая-таш бар.

Ҡасандыр бер байҙың Исламғол тигән ялсыһы булған, тиҙәр. Бай быныӊ эшенән ниндәйҙер бер ғәйеп- ғилле табып, бик ныҡ асыуланған да уға ҡаты яза бирергә булған. Аҙаҡ йәнә уйлап-уйлап торған да:

- Бар,- тигән,- әгәр ҙә бынау Һандыҡташ башына менеп, ҡурай уйнай алһаң, ғәйебеңде ғәфү итәм, ә инде хәлеңдән килмәһә, минән яҡшылыҡ көтмә, өтө ҡат тиреңде туңармын, имеш.

Ярлы кешенең ялыныс, ти бит - ни хәл итһен инде Исламғол? Киткән был Һандыҡташ аҫтына. Әҙәм аяғы баҫмаған ҡая башына менеп, ҡурайын уйнап ебәргән. Бөтә халыҡ хайран ҡалып тыңлаған. Аҙаҡ был ҡая-ташҡа уның исемен ҡушып, Исламғол ҡурай тартҡан таш тип йөрөтөр булғандар. Ә байҙың исемен дә онотҡандар.

## Кусмәташ

Борон борон бөҙҙөң һабанаҡ аулында тирә яҡта үҙенең байлығы менән дан тотҡан Ҡарабай тигән бер бай йәшәгән. Уның Көнһылыу исемле бик матур ҡыҙы булған. Көнһылыу иртән тороп һыуға барһа, уның һылыулығын күреп, ағып ятҡан Әй һыуы ла ағыуынан туҡтап ҡалған. Ә инде ул, йөрәкһеп, йырлап ебәрһә, ер менән күк тә шып-тым ҡалып, һандуғастар ҙа унан көнләшер булған. Көнһылыуҙы күрһәләр, егеттәр, ҡайҙа баҫырға ла белмәй, телдән яҙып ҡалғандар. Ҡыҙын һоратып, Ҡарабай йортонан яусы ла өҙөлмәй булған. Әммә Ҡарабай үҙ ҡыҙын Ҡаҙан мырҙаһы Аҡсураға бирергә һүҙ ҡуйышҡан икән.

Бер ваҡыт шулай ҡыҙҙар менән егеттәр һабантуйға йыйыла. Бөтә ярыштарҙа ла күрше Ләмәҙтамаҡ ауылының көтөүсеһе Арыҫлан тигән егет еңеп сыға. Көнһылыу уға бер күреүҙән үк ғашиҡ була. Егетте ҡотлап, бүләктәр биргәндә, Көнһылыу ҙа ситтә ҡалмай - уға үҙенең ебәк яулығын һалып бирә.

Һабантуйҙан һуң бер-нисә көн үткәс, йәш-елкенсәк өй һымаҡ бейек ҡая таш янына уйынға сыға. Ҡыҙ-ҡырҡынды күбәләктәй бейетеп, Арыҫлан батыр ҡурай уйнай. Баҫҡан ерендә ут сығарып, Көнһылыу ҙа бейей. Аҙаҡ, тирегәмеш һымаҡ, төрлөһө төрлө яҡҡа таралышҡас, Көнһылыу менән Арыҫлан икәүҙән-икәү генә тороп ҡала. Былар шулай, донъяларын онотоп, һөйләшкән-серләшкән саҡта ғына эргәләренә мулла менән мәзин килеп сыға. Уларҙың ҡалай килеп сыҡҡанын ғашиҡтар һиҙмәй ҙә ҡала. Быларҙы тотоп алып, Ҡарабай йортона алып киләләр. Мулла күптән инде Көнһылыуҙы үҙенә дүртенсе бисәлеккә алырға ҡыҙып йөрөгән була. Тик Ҡарабай ғына һаман серәшеп, риза булмай килә. Хәҙер инде мулла, йыш килеп сыҡҡас, уға:

- Бына һинең юлдан яҙған ҡыҙыңды тотоп килтерҙем,- ти. Ҡарабай, бөтәһенән дә төпсөнөп белгәс. Арыҫланды иҫтән яҙғансы ке-

ше яллап тукматтыра. Әгәр ҙә мулла был хакта бер кемгә лә өндәшмәһә, уға ярты байлығын бирергә була. Был хәлдән һуң күп тә үтмәй, Көнһылыуҙы карт муллаға бирәләр, имеш, тигән хәбәр тарала. Был хәбәрҙе ишеткәс, Арыҫлан бик кайғыра, шулай ҙа Карабай йортона атаһын яусы итеп ебәрә. Арыҫландың атаһы тирә якка даны сыккан байға яусы булып барырға тыймаһа ла, ни булһа ла булыр, тип, байға барып баш һала. Карабай асыуынан кара янып, карт өҫтөнә эттәрен өҫкөтөп ебәрә.

– Хәйерсе! Һинең улың аркаһында мин әрәм рисуайы булдым. Кыҙымды мырҙаға бирәһе урынға, муллаға бирәм хәҙер. Бар, тупһаңа аяғыңды баҫаһы булма!– тип кыскырып кала был.

Арыҫлан менән Көнһылыу теге Өй һымак таш янында тағы осрашалар. Бер-береһен косаклап, илашалар. Шул арала Карабай,мулла менән мәзинде эйәртеп, кыҙын эҙләргә сыға. Юлда улар әле генә Казандан килеп төшкән Аксура мырҙаны осраталар. Аксура ла быларға кушылып китә. Теге кая таш янына барып сыкһалар, Көнһылыу менән Арыҫлан косаклашып ултыра икән. Мулла шунда бысағын алып, ғашиктарҙың икеһен дә сәнсеп үлтерә.

Китә шунда һуйыш-кырылыш!.. Аксура, кыҙҙы харап иттең, тип муллаthe үҙенә хәнйәр каҙай. Ә мәзин – Аксураны, Карабай мәзинде ботарлап ташлай.

Шул сак караңғы төшөп, йәшен йәшнәп, күк күкрәп, ғәрәсәт купкандай, койоп янғыр яуа башлай. Кан ташты йәшен атып, таш кап уртаға ярылып, ике таш та ике якка тәгәрәп китә. Карабай был хәлде хоҙай кәһәрләләр, тип, яманға юрап, акылдан шашып, таш артынан кая аҫтына ташлана.

Өй һымак таш шулай, икегә ярылып, икенсе урынға күсеп ятканға,Кусмәташ булып кала. Әле лә ул ауылға якын ғына ерҙән күренеп тора.

## Йәнгүзәй тауы

Борон был тау башында Йәнгүзәй батыр йәшәгән, тиҙәр. Ул һунарға йөрөп көн күргән, ә бисәһе, өйгә күҙ-колак булып, яңғыҙ ултырған икән.

Көндәрҙән бер көндө уны кырғыҙҙарҙың соксон ырыуынан бер батыр урлап алып китә. Йәнгүзәй һунарҙан кайтып төшһә, бисәһе өйҙә юк булып сыға. Ул шунда ук, тау зыңкыйына менә һалып, тирә якка күҙ йөрөтөп сыкһа, бер алтмыш сакрым ерҙә ике һыбайлының сабып китеп барғанын күреп кала. Был шунда, тиҙ генә атын эйәрләй һалып, үҙенең һунар этен сакырып һыҙғыра ла тегеләр артынан кыуа китә. Бик оҙак саба торғас, каскындарҙы кыуып етә яҙа. Үҙҙәре артынан кыуғын төшкәнде һиҙмәйенсә, кырғыҙ батыры Йәнгүҙәйҙең бисәһе менән бер аҙ ял итеп алырға булалар. Шунда ук йоклап та китәләр. Йәнгүзәй килеп етә лә, быларҙы уятып, бисәһенә кире бороломорға куша. Шунан бисәһе:

- Кем көрәшеп еңһә, мин шуныкы булырмын,- тигән шарт куя.

Батырҙар шунда ук, билдән алышып, көрәшә лә башлайҙар. Берберeһен алып ташлай алмай, оҙак көрәшә былар. Аҙак Йәнгүзәй хәлдән тая башлағас:

- Ярҙамлашыр инең, исмаһам,- ти икән бисәһенә. Ә уныһы:

- Юк, бер кемгә лә ярҙам итмәйем, - тип кырт киҫкән, ти.

Шул сак Йәнгүзәй кырғыҙға үҙенең бурҙайын өҫкөткән икән, уныһы, арттан килеп, кырғыҙҙың аяғынан эләктереп ала ла һеңерҙәрен сәйнәп бөтөрә, ти. Йәнгүзәй шунда дошманын хәнйәр менән сәнсеп үлтерә лә бисәһен алып кайтып китә. Тиҙҙән былар икәүләп кайнатай йортона кунакка баралар.

Батыр бөтә хәлде кайнатаһына һөйләп биргәс, уныһы улдарын сакырып алала кәңәш-төңәш итешеп алырға була. Улдарының бе-

реһе һеңләһен, киҫәкләргә турап, утта яндырырға, икенсеһе - сәнсеп үлтерергә, өсөнсөһө - уҡтан атырға, дүртенсеһе ҡул-аяғын ҡырҡып ташларға кәңәш итә. Тик Йәнгүзәй быларҙың береһе менән дә ризалашмай. Шул саҡ ҡайнатаһы, иң юғерек атты һайлап хаин бисәне ат ҡойроғона бәйләп, далаға ҡыуып ебәрергә ҡуша. Ә Йәнгүзәйгә:

- Һиңә бирәҙәй өс ҡыҙым бар, теләһә ҡайһын һайлап ал үҙеңә,- ти.

Йәнгүзәй иң кесе балдыҙын һайлап ала ла әүәлгесә йәшәй бирә. Батырҙың тирмә йорто торған тауҙы әле булһа Йәнгүзәй тауы тип йөрөтәләр.

## Күкташ хакында

Бик күп йылдар элек Ҡатау йылғаһы буйындағы сатыр тауҙар араһында ятҡан Ишембай ауылында булған был хәл.

Йәйге эҫе көндәрҙең береһендә бөтә ауыл халҡы Күкташ янына һабан туйға сыҡҡан.

Йәш егеттәр ат сабыштыра, көрәшеп, көс һынаша, мәрәйгә уҡ атыша, ә ҡарттар, сәсәндәрҙең ҡобайыр әйтешеүен тыңлап, борондо йырҙарҙы йырлашып, йәшлектәрен иҫкә төшөрөп ултыра. Бигерәк тә атта ыласын кеүек елер, көрәштә бер кемгә лә бил бирмәҫ дан егет Мәхмүтҡол батырҙы телдән төшөрмәй, маҡтап һөйләйҙәр.

Ә Мәхмүтҡол был ваҡытта үҙенең һөйгән ҡыҙы – һылыуҙарҙан һылыу Рәмзиәһе менән Күкташ өҫтөнән аҫылынып торған ҡая аҫтында серләшеп ултыра икән.

Ҡапыл шул саҡ ҡара болот сығып, күк күкрәп, йәшен йәшнәп, ҡойоп ямғыр яуа башлай. Тирә яҡты яҡтыртып йәшен йәшнәй ҙә сатырҙатып киләтерен Күкташҡа ата. Ҡаянан ҙур бер таш актарылып төшөп, быларҙы аяҡтан бәреп йыға ла үҙе менән бергә он-талҡан итеп, аҫта аҡҡырып ятҡан Ҡатауға илтеп бырактыра.

Бөтә халыҡ батыр менән уның ҡыҙын йәлләп, ҡан-йәш түгеп илаша.

Аҙаҡ был ерҙе Шайтан-Көҙөй йортонан тартып алып, урыҫ сауҙагәрҙәре менән заводсылары Ҡатауҙың йөрәгенә ҡуйған урынында Ҡатау-Тамаҡ заводын һалдыралар. Ҡатау-Тамаҡ башҡорттары иҡенсе урынға күсеп ултыра.

Шулай ҙа Ҡатау-Тамаҡтағы Күкташты, Күкташ аҫтында ҡыҙы менән һәләк булған Мәхмүтҡол батырҙы бер ҡасан да онотмайҙар. Атаһы Юлай менән Салауат та был ер өсөн һуғышып йөрөй. Ә Ҡаянан актарылып төшкән таш әле булһа йылға төбөндә ята.

Киленташ

Камыкай байҙың йылкы көтөүендә бик күп бейәләре була. Бейәләрҙе көтөүсе бисәләре һауып та өлгөрә алмай икән.

Бер көтөүсенең бисәһе шулай, хәлдән тайып, үлеп киткәс, был күрше ауылға кәләш йәрәшергә бара. Юлда ул еләк йыйып йөрөгән бер ҡыҙҙы осрата. Ҡыҙ шул тиклем һылыу була, быны хатта иҫе китеп тора. Аҙаҡ, иҫенә килеп, ҡыҙҙың үҙенә кейәүгә сығыуын һорай. Ҡыҙ риза була.

Уны шулай матур килен тип атайҙар. Матур килен бик уңған да, йылғыр ҙа булып сыға. Иң уҫал бейәләрҙе унан ғына һауҙыралар. Тик бер көндө тау аҫтында бейәләр һауып йөрөгәндә, тауҙан таш ишелеп, уны ҙур бер таш баҫып үлтерә. Хәйерсегә ел ҡаршы, ти бит. Көтөүсегә кәләшен һағынып ҡарарға шул таш ҡына торол ҡала. Ул ташты әле булһа Киленташ тип йөрөтәләр.

Айғыр тауы

Элек был Айғыр тауы һыртында, еләҫ ер булғас, гел йылкы өйөрҙәре йөрөгән. Йылкыларҙы өйөр башында йөрөгән бер айғыр көткән.

Бер заман был акланды уратып алған урманда янғын башланған. Тирә яктан калған килгән ялкындан куркып, өйөрҙәге аттар кешнәшеп-сыркырашып, бер-береһенә һикерешеп, бөтәһе бер юлы түбәндәге ярлауға табан эркелгәс, өйөр айғыры быларҙың юлына арҡыры төшөп, өйөрҙө текә ярҙан йылғаға төшөрмәй сабып йөрөй башлаған. Һәр атты был урман үткәүеленән берәм-берәм генә үткәреп ебәрә икән. Шулай итеп, бөтә өйөрҙө аръяк ярға сығарып бөтәүгә бының үҙен ялкын өтөп, тиреһе көйә башлағас кына, һыуға һикереп төшә. Тик йылғаны йөҙөп сығырлык хәле калмағас, айғыр шунда һыуға батып үлә...

Шуға күрә был тау үҙе лә, йылғаһы ла Айғыр исемен йөрөтә. Аҙак бындағы станцияны ла ошо батыр Айғыр исеме менән атайҙар.

# Дүнәнһуйғантау

Җасандыр Власов тигән бер землемер Белорет заутына Дүнәнһуйғантау итәктәренән урман межалап алырға килгән.

Был шулай, камсыһын һелтәп, һыбай йөрөй икән. Камсыһын кайҙа һелтәһә, шунан межа ярып сығалар быныҡ кешеләре. Бергә эйәреп йөрөгән башҡорттар, быныҡ камсыһының бик күр һелтәнгәнен күреп: "һаман былай һелтәнеп йөрөһә, беҙ үҙебеҙ урманһыҙ, тауһыҙ калабыҙ ҙаһа!" баштарын сайкаша башлағандар."Инде был камсыға нисек итеп ял бирергә?" тип уйлағандар.

Шул сак Мулкамал тигән бер карт дүрт кышлар айғырын һуйып, землемерҙе ғарж иткәнсе һыйларға булған. Ашап өйрәнмәгән йылкы итенән эсе китеп ятһа, бик һелтәнеп йөрөй алмаҫ",- тигәндәр дәр инде. Шулай итеп, теге Власов, ысынлап та, тауҙың төшлөк яғы менән көнбайыш яғын межалай алмайынса, кайтып киткән. Аҫаба башҡорттарҙың урман-көтөүлектәре үҙҙәренә тороп калған.

Бына шуға күрә лә хәҙер был тауҙы Дүнәнһуйғантау тип йөрөтәләр.

# Ямантау

Ямантау - ысынлап та исеме есеменә тап килгән тау ул. Уның әллә купме уйкыл-уйпаттары, кая-таштары бар. Тубәһе һәр сак тиерлек томанға ураланып тора, хатта йәйге селләләрҙә лә унда һыуык була.

Элегерәк уның башына кутәрелергә лә куркҡандар. Томап ятҡан сактарҙа куҙгә төрлө ен-бәрейҙәр күренә торған булған. Шуға ла: "Ямантауға барһаң, кире кайтмаҫһың", тигәндәр. Бигерәк тә куңыслы и галош шәкелендәге Сарыҡташ тигән каянан куркҡандар. Тау тубәһендәге бағанаташ менән бәләкәй генә куленән дә шикләнер булғандар. Имеш, ул кулдә кара болот киәфәтенә керә торған аждаһа-Йылан йәшәй икән. Шуға курә, Ямантау яғына тоҫкап, боронғо ук-йәйәләрен кутәрергә лә кыймағандар.

Олатайым мәрхум: "Ямантауҙы болот каплаһа, көн йонсоуға китә, томан калкһа, көн аяҙ була", тип юрай торғайны.

# Ике Инйәрҙең бәхәсе

Оло Инйәр менән Кесе Инйәр Ямантауҙан башлана ла Инйәр посёлкаһы эргәһендә бергә килеп ҡушыла.

Имеш, улар ҡайһына ҡайһы яҡҡа ағырға тип бик оҙаҡ бәхәсләшкәс, былай тип һүҙ ҡуйышҡан: ҡайһы иртәрәк торба, шул - уңға, ә һуңға ҡалғаны һулға ағып китергә тейеш була. Оло Инйәр иртәрәк килеп тора ла, Кесе Инйәр йоҡонан уянғансы, байтаҡ ҡына араны үтә һала. Кесеһе, йоҡоһонан торғас, ағайынан тороп ҡалмайым тип тура һыпырта...

Шуға күрә уны, ағаһынан тар булмаһа ла, Кесе Инйәр тип атайҙар. Тик ағаһы ҡустыһынан етеҙерәк аға.

## Пугачев хазиналары

Пугачев хазиналары хакында был якта күп һөйләйҙәр. Күп һөйләһәләр ҙә, табылғаны бик һирәк. Ә бына мин һеҙгә табылғаны хакында һөйләйем әле.

Бынан һикһән-туҡһан йылдар элек бер туған рус ике егете - Александр менән Степан Гусевтар хәҙерге Күгәрсен районындағы Гусевка хуторынан Ырымбурға барырға тип юлға сыға. Юлда, Синегорка ауылына инеп, ҡунып китергә булалар. Аттарын дуғарып, өйгә инһәләр, мейес башында ҡарындыҡтай ҡороноп бөткән һуҡыр бер ҡарсыҡ ята икән. Ҡарсыҡ быларҙың һөйләшеүенән мосалдәр[I] икәнлектәрен танып ала ла:

- Һеҙ Кананикольскийҙәнме? - тип һорай.

- Юк, беҙ Гусевканан,- тиҙәр былар.

- Ҡайһы Гусевканан? Кесе Эйектеге Ямашлы тамағы эргәһендәгеме?- тип төпсөнә ҡарсыҡ.

- Дөрөҫ! Ҡайҙан беләһең, әбейкәй?- тип аптырашта ҡала былар.

- Мин бит йәш сағымда Пугачев менән йөрөнөм, уның бешексеһе була торғайным. Ырғыҙлыға китеп барғанда,беҙҙең арттан һаҡмар казактары ҡыуа башлағас, Пугачев Ямашлының һул як ярында,йылға тамағы эргәһенә генә алтын күмеп ҡалдырырға әмер бирҙе. Ул бит байҙарҙың бик күп алтынын тартып алғайны. Ул алтын, моғайын, хәҙер ҙә ер аҫтында ятадыр әле...

Ҡарсыҡтың был хәбәрен ишеткән Гусевтар ауылға әйләнеп ҡайтҡас, быларҙың олоһо Александр төндә тороп, Ямашлы тамағына бара ла алтын сүлмәген эҙләп таба. Алтынды алып ҡайтып,кеше күрмәгән ергә генә йәшереп ҡуя. Хазина хаҡында бер кемгә лә бер һүҙ ҙә әйтмәй. Бер нисә көн үткәс, кесе туғаны Степан, ҡарсыҡтан ишеткән хәбәрҙе хәтерләп, Пугачев хазинаһы хаҡында атаһына һөйләп бирә.

- Инҙә быны Ырымбурҙан кайткас ук һөйләмәнең?- тип аптырай атаһы.

Степан,атаһы менән ағаһын эйәртеп, Ямашлы ярына китәләр. Бөтә ерҙе казып бөтерәләр, тик бер ниндәй хазина ла тапмайҙар. Ә ағаһы Александр әлеге йәшергән еренән Пугачев хазинаһын алып кайтып, атаһынан башка айырылып сыға ла урман эше менән көсеп итергә тотона. Һалдар ағыҙа, кыуғын кыуа. Үҙенә ер ҙә һатып ала. Өҫтәүенә ике тирмән корол ебәрә: береһен - Шырғызда, икенсеһен - Кузьминовкала.

1930 йылда, колхоз сыккас, инде арыу ук оло йәштәге Александр Петрович Гусев картты кулак итеп һөреп ебәрәләр. Был хөкүмәт кулактан күпме алтын тартып алғанын байтак кеше хәтерләй әле. Беҙҙең яктарҙың сереген бер байы ине ул. Шулай итеп, Пугачев хазинаһы бик байыткан булған уны...

## Алтын табак менән алтын калак, йәки
## Юләмбәт батыр

Башкорт илен ғүмер бакый төрле яктан төрлө хандар өҙгөләп йонсоткас, ил аҡһакалдары, ҙур йыйын йыйып, төрлө якка яһак түләп интеккәнсе, бер батшаға ғына баш һалайык та куяйык, тип, кәңәш-төңәш итешкәндәр ҙә Рәсәй батшалығына кушылырға булғандар, ти.

Был хакта ак батшаның үҙе менән һөйләшеп-килешеп кайтырға, тип, башкорттар Иван Грозныйға ун ике илсе ебәргәндәр. Улар араһында Юләмбәт батыр ҙа булған, тиҙәр.

Акбатша быларҙы бик яҡшы кабул иткән, имеш. Ҙур мәжлес күрөп, алдарына алтын табактар менән алтын калактар куйып, һый-хөрмәт күрһәткән. Мәжлестән һуң батшаның һауыт-һаба йыйыштырыусылары иҫәпләп караһалар, бер алтын табак менән бер алтын калак етмәй икән, ти. Был хакта батшаға хәбәр итәләр. Батша хөкөмө үҙ кулында бит: тоткан да был илселәрҙе тентеп сығырға кушкан. Теге алтын табак менән алтын калак Юләмбәт куйынынан килеп сыккан. Батша бынан:

- Ниңә алдың быларҙы? - тип һораған икән, Юләмбәт аптырап тормаған, былай тип яуап биргән, ти:

- Мин, илемә кайткас, һинең яҡшы батша икәнлегеңде бөтә ырыуҙаштарыма һөйләп бирергә теләйем. Ә беҙҙең башкорт, үҙе тотоп карамайынса, бер нәмәгә лә ышанмай ул. Шуға күрә был алтын табак менән алтын калакты, башкорттарҙы яраткан өсөн батша үҙе бүләк итте,- тип күрһәтергә алғайнык. Юкһа, батша бүләген үҙҙәре тотоп карамайынса, улар һине нисек хөрмәт итһен [illegible] дә нисек яратһын?- тигәс, Юләмбәттең сосоллоғона

батшаның иçе киткән. Батша, уның зирәклеген мактап, бөтә илсе-
ләргә лә берәр алтын табак менән берәр алтын калак бүләк итеп,
башкорттарға үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булырға мәңгелек грамота-
лар яҙып кайтарған, ти.

## Байымдың ер һатыуы

Хәҙерге Белорет калаһының дәүләт банкы ултырған ерҙә касандыр Байым тигән башкорттоң тирмәһе торған, ә уның тирә яғында көтөүлектәре йәйелеп яткан.

Бер вакыт Твердышев тигән урыҫ сауҙагәре бер түтәрәм икмәк, бер кулә-каҙан менән бер балта хакына Байымдан үгеҙ тиреһендәй генә ер бирәүен һораған.

Байым, үгеҙ тиреһендәй генә ер булдымы, тип уйлаған да, әйҙә алһын, тигән. Үҙе, оттом быны, тип көлә икән. Шунан былар килешеү төҙөгәндәр. Ә сауҙагәрҙең хәйләһеҙе буламы - үгеҙ тиреһен кылдай ғына итеп телгән дә ошо кыл менән Байымдың әллә ни саклы ерен уратып алған. Аҙак ошо ергә заүыт һалдырып, Байымдың үҙен йәйләүенән кыуып ебәргән.

Белорет заүыты һалынған ерҙе әле оҙак вакыт Байымтархан ере тип йөрөткәндәр. Ә Байым үҙе, Уралтау арьяғына күсенеп, хәҙерге Байым ауылы ерендә төйәкләнгән.

## Сыҫкандар менән тубалдар

Был хәл әле Пугачев менән Салауат яуына тиклем үк булған.

Оло Инйәр буйындағы Күҙйылға тамағы эргәһенә Әрепкол һунарсы килеп ултыра, ә унан ары ес сакрымдай ғына Майғашлы ағып ятҡан ерҙә уның бер туған энеһе Ғәҙелша килеп төйәкләнә. Был ике араны ла сыскандар араһы тип йөрөтәләр. Хәҙерге Әрепкол менән Ғәҙелша ауылдарының халкы бөтәһе лә ошо ике бер туғандаш таралған тоҡом.

Салауат яуы баҫтырылғас, яуҙа катнашыусыларҙың бөтәһе лә, Сермән ауылынан касып китеп, ошо урман араһында яткан Әрепкол ауылына килеп төйәкләнгән, тиҙәр. Был касындарҙың бөтәһен дә тубалдар тип йөрөтәләр. Сыскандар менән тубалдар, йыш кына бола куптарып, ыҙғышып торғандар.

Тубалдар араһында йәйләүгә сыккан сакта элек-электән аттарын күгәүен-фәләндән бийайтын һаклар булғандар: аттарының арҡаһына төрлө серек-сөрөк һалынған тубалдар аҫып куялар ҙа,шул серек-сөрөктәре тотон, быҫкытып йөрөй, себен-күгәүен кунмай икән. Бер сак шулай бер ала бейәнең силәк-тубалы янып киткән дә тиреһенә ут капкан был бейә, нишләргә лә белмәй, урле-кырлы сабып йөрөй икән. Бейәһен тота алмай, югереп йөрөгән хужаһы:

- Акылың булһа, һыуға һикер, ала бейә!- тип һөрәнләй, ти.

Ала бейәһенең акылы еткәндерме-юкмы, әммә хужаһына тубал кушаматы мәңгегә тағылып калған. Шунан бирле был кушамат әле һаман быуындан-быуынға күсә килә.

Әрепколдоң ейәне Заһретдин бөҙҙең яктарҙа, урыҫтан күрмәк-

се, зауытка күмер үртэп кэсеп иткэн тэүге башкорт булган. Күмерзе, кэбэн һымак агас өйөп, ер менэн каплап үртэгэндэр зэ Лапышты зауытына ташыгандар. Заһретдинден улы Фэхретдин дэ, уның улы Шэмсетдин дэ шулай күмер үртэгэндэр. Шэмсетдине минең атайым була инде.

## Шәйәхмәт Сибай кантон

Сибай карттың ун бер улы була. 1649 йылда уның өс улы Ырымбур яғындағы Ташлы көн туғайынан күсенеп килә. Килгәс, олаталары Атайсал исеме менән аталған ауылға нигеҙ һалалар. Сибайҙың ейәне Утарбай /Умарбай булырға тейеш/ 1833 йылғы бер һуғышта ҡаҙаҡтарға әсирлеккә эләгә. Уның ун бер йәшлек Шәйәхмәт исемле улы ҡала. Шейехмәт Ырымбур приютында үҫә. Тыуғанүҫкән еренә ҡайтҡас, кантон сәркәтибе булып эшләй, армияла хеҙмәт итә, аҙаҡ Сибай кантонының башлығы булып китә. 1864 йылда вафат була. Хәҙерге тауҫылар, металлургтар ҡалаһы Сибай ул ваҡытта әле Атайсал булып йөрөй, аҙаҡ Сибай ауылы булып китә.

## Мәхмүт ҡурайсы менән Шәйәхмәт Сибай

Мәхмүт исемле ярлы ҡурайсы була. Уның шул тиклем оҫта уйнауына хайран ҡалғандар. Тик Мәхмүт, тура һүҙле булғанлыҡтан, байҙар менән һис тә һыйыша алмаған икән. Уның өҫтөнән төрлө ошаҡ-маҙар йөрөтә башлағас, ул үҙ ауылынан сығып китә лә, Иҫке Сибай ауылына килеп, кантон башлығы Шәйәхмәт Сибайҙың ҡурайсыһы булып йөрөй.

Бер мәл Мәхмүт Ҡыҙылға барырға юлға сыға. Ул шулай юлда барғанда, уның атын кантон тройкаһы ҡыуып етә. Үҙ һүҙле Мәхмүт артта тороп ҡалырға теләмәйенсә атын ҡыуа башлай. Был шулай Ҡыҙылға бәренсе булып барып инә. Мәхмүттең атына кантон башлығының бик күҙе ҡыҙа. Яҡындарының кәңәше буйынса, ул Мәхмүтте, бурлыҡта ғәйепләп, ес йылға Себергә ебәрттерә.

Мәхмүт, һөргөндән ҡасып, йәйәү килеш Петербурға барып етә лә батшаның үҙенә керергә юллап йөрөй.

Батша кешеһе, Мәхмүттең ҡурайҙа уйнауын тыңлап, уның оҫталығын маҡтай ҙа үҙен батшаға алып инә. Батша ла Мәхмүтте бик оҡшата. Уға полковник чинен биреп, Орскиға хеҙмәткә тәғәйенләй.

Мәхмүт, иленә ҡайтҡас, батша полковниген ҡаршы алһындар, тип, Сибайға депеша ебәртә, ә үҙе Ғәли ауылында иҫке бер танышына туҡтала. Кантон түрәләре, уны ҡаршы алып, ҡунаҡ итә башлайҙар. Ауыл кешеләре уны танымайса, үҙҙәренең Мәхмүт тигән яратҡан ҡурайсылары булыуын, наҡаҡ бәлә тағып, уны Себергә һөрөүҙәрен, хәҙер уның ҡайҙа икәнен дә белмәүҙәрен һөйләп бирәләр. Шул саҡ полковник Мәхмүт ҡурайсының ҡатынын са-

ҡырып килтерергә ҡуша. Мәхмуттең ҡатыны ирен таныгас, үҙҙәренең яратҡан ҡурайсыһының ҡайтып килеүенә бөтәһе лә бик шатлана. Тик кантон башлығы Шәйәхмәт Сибайҙың ғына үҙ дошманының шулай полковник булып ҡайтып килеүенә бик асыуы килә. Ул нисек тә бынан үс алырға була. Мәхмуттең денщиген һатып алып, уны ағыу эсереп үлтерергә ҡуша.

Ҡыҙыл ауылында Мәхмүт трактирға туҡтағас, һыра эсә башлай. Мәхмүт тышҡа сыҡҡанда ғына денщиге быныҡ стаканына ағыу ҡоя. Мәхмүт, ингәс, ағыулы һыраһын эсеп ебәрә лә бик ҡаты ауырый башлай. Шунда табип саҡырталар. Ул Мәхмүтте ағыулағандарын әйтә. Тик, табипты ла һатып алғас, уныһы Мәхмүтте дауалап тормай. Тиҙҙән Мәхмүт, йөрәге ярылып, вафат була.

Шулай итеп, Мәхмүттән уның үҙе сығарған йырҙары ғына тороп ҡала. Ул йырҙарҙы әле лә йырлайҙар.

## Тимерсе Әмин менән Брагин түрә

Ҡасандыр Баймаҡ яғына Брагин тигән ҙур бер түрә килеп төшә. Уны һалдаттары ҡараусыллап йөрөй икән. Был түрәгә беҙҙең арһыуҙар, урмандар, көмөш балығы тулы һаҡмар буйҙары, аҫыл таштары кәнгә балҡып ятҡан Яғалса, Ирәндек тауҙары, бигерәк тә тал-ҡамыш менән уратып алынған Талкаҫ күле бик оҡшағас, уның был байлыҡтарға хужа булғыһы килә. Күп тә үтмәй, ул үҙенә ошо башҡорт ерҙәрен тартып ала. Брагин үҙенең күҙе төшкән һәр ҡыҙы тотоп мыҫҡыл итә башлай. Әгәр берәй егет кәләш йәрәшһә, тәүге төндә ҡыҙ менән үҙе үткәрә торған тәртип индерә. Уның башбаштаҡлығынан халыҡтың түҙеп торор хәле ҡалмай.

Хәҙерге Әмин ауылы ултырған Яғалса тауы аҫтында Әмин тигән тимерсе йәшәй икән. Ирәндек арьяғында ла Уралтау арьяғында ла оҫталығы менән уға тиңләшерҙәй башҡа бер кем дә булмай. Булат ҡылыстар ҡойҙорорға тирә як батырҙары уға ғына килер булған. Брагинға был бик оҡшап етмәй - халыҡ, ҡоралланып алып, бола ҡуптарыр, тип ҡурка был. Тирә яҡта даны сыҡҡан тимерсене был, ҡулға алып, хибескә яптырып ҡуя.

Берҙән-бер көн Брагин ошо ерҙә бик ҡаты нығытма-ҡәлғә һалдырырға уйлай. Ә бының өсөн таҡта таштар ектартырға кәрәк була. Был шунда Әмин тимерсегә килә лә ҡая тауҙан таш киҫергә бик үткер ҡаты ҡылыс ҡойорға ҡуша. Әминде тимерлегенә килтерт теп, һалдаттар менән Брагиндың үҙ күҙе алдында ҡылыс ҡойҙорталар. Ҡылысты һынап ҡараһалар, ҡылыс ташты киҫмәй ҙә ҡуя икән. Әмин икенсе ҡылысты ҡоя. Бынһы ла ташҡа үтмәй. Брагин,

бик нык асыуланып, әгәр зә өсөнсө кылысы ла яраҡһыҙ булып сыкһа, Әминде, назаға тарттырасакмын, тип ҡурҡыта. Әмин батыр, бик оҙак уйланғас, тәүәккәлләргә була. Бына тигән булат кылыс коййп бирә. Брагин менән ҡая янына барып, кылысы менән бар көсөнә киреләп сапһа, таш быяла һымак кап уртаға ярылып китә.

Брагин үз кулына шундай кылыс килеп эләгеүенә бик шатланып, Әминде иреккә сығара, уға киммәтле бүләктәр бирә. Ә акыл эйәһе акһакалдар:

— Һин нишләйһең, батыр? Былай ҙа халык был кәһәр һуккыр түрә аркаһында зар илай. Ә инде ул Һакмар буйына таш кәлғә лә һалдырһа, илгә оло каза киләсәк. Ул сакта инде бөтөнләй һәләк булырбыҙ,— тигәндәр икән, Әмин уларға:

— Юк, был хәл булмаясак!— тигән дә, башка бер һүҙ ҙә әйтмәйенсә, кинәт кепә юлға сығырға булып, тиҙҙән Ирәлсә тауының тауын артылып, күҙҙән дә юғала.

Ул Брагиндың үз һалдаттары менән Талкаҫ күле буйында балык тотоп, өйрәк атып, кәйеф-сафа короп ятканын белгән була. Әмин батыр ана шунда юл тота ла инде. Күл буйына килеп етһә, Брагиндың Талкаҫ уртаһында кәмәлә балык кармаклап ултырыуын күрә. Әмин шунда, тиҙ генә әҙерлә йәйәһе менән алмас башаклы уғын алып, хххх атып та ебәрә. Ук, кәмәнең төбөн актарып, һыу төбөнә барып каҙала. Брагин ни булғанын иҫләп кыскырырға ла өлгөрмәй кала, һыу тулған кәмә бата ла башлай. Арьпк ярҙан, кәмәнең батканын күреп, ярҙамға ташланалар. Тик инде һуң була! Йшуан корһак Брагин йөҙөргә лә белмәй икән. Шулай ҙа, ауыҙына һыу уртлап, күл төбөнә киткәнсе, бармағынан киммәтле балдағын сисеп, уны һыуға ташлап өлгөрә. Уның ниңә шулай иткәнен бер кем дә белмәй.

Брагиндың мәйетен бик оҙак эҙләгәс кенә табып сығаралар. Аҙак кәмәһен дә табалар. Карайалар, кәмәнең төбө аҡтарылып киткән була. Ни актерғанын берәү ҙә белмәй. Һыу төбөн һеҙеп карайалар, алмас башаклы башкорт уғы килеп сыға. Брагиндың бөтә командаһы мәйет тирәһендә ығы-зығы килгәнсе, Әмин тиҙ генә икенсе як ярҙағы Брагин өйөнә инеп, үҙенең теге булат кылысын алып та сыға. Кылысты күл төбөнә ырғыта ла кире ауылына табан һыҙа.

Брагин катынының әмере буйынса, Әмин менән бергә бөтә башкорт егеттәрен кулға алып, алмас башаклы уктың кемдеке булыуын белергә тырышалар. Тик укты атыусының кем икәнлеген барыбер белә алмағас, Брагин катыны кулға алынғандарҙы аҫырға куша.

Карт акһакалдар кәңәш-тәңәш итешеп алалар ҙа сал сәсле акһакалдарҙың дүртеһе, был катынға килеп:

- Беҙҙең егеттәрҙе харап итмәгеҙ, уларға әле йәшәргә, ил һакларға , ак батшаға яһак түләргә, кетәү көтөргә кәрәк. Брагинды улар түгел, быша беҙ дүртебеҙ үлтерҙек,- тиҙәр.

Карттарҙың һүҙенә ышанмайынса, был уҫал бисә уларҙы бик оҙак интектерә. Күпме генә тепсенһә лә, карттар үҙ һүҙҙәрендә нык тора. Ак күңелле был дүрт акһакалдың дүртеһен дә иҫән йылғаһы ярындағы йөҙәшәр дүрт карағаска илтеп аҫалар. Ә егеттәр үҙ ауылдарында тороп кала. Брагиндың катыны, был кыйыу сая халыктан куркыуға төшөп, үҙенең һалдатты, офицерҙары менән кире Питербурға кайтып китә лә башкаса беҙҙең был яктарға аяк та баҫмай.

Батыр тимерсе хөрмәтенә ул йәшәгән ауылды халык Әмин ауылы тип йөрөтә башлай, ә ул булат кылысы менән уртаға ярған

танты Әмин ташы тип атайҙар.

Ҡарттарҙан ишеткән тағы бер хәбәрҙе һөйләйем әле. Талкаҫ күле, имеш, Ирәндек һырты аҫтынан ағып ятҡан йылға аша Серек-күлгә барып тоташкан икән. Ысынмылыр, юкмылыр - Брагиндың балдағы, күп замандар үткәс, ошо Серекkүлдә тотолған бер суртан эсенән килеп сыккан, тиҙәр.

Тимерсе Әмин нисек итеп Брагинды отҡан

Бынан ике йөҙ илле йыл элек Брагин тигән бер түрә Әмин ауылы эргәһендә таш ақтартыу эшен башлап ебәрә. Был Брагин үҙе бик яман әҙәм булып сыға: халыҡты ҡан илатып, ҡатын-ҡыҙҙы мыҫҡыл итеп йөрөй. Бөтә ауыл халҡы быныҡ үҙе менән һалдаттарынан нисек тә ҡотолоу юлын эҙләй. Йыйнаулашып, үс алырға булалар. Әмин тигән тимерсе йәшерен генә ҡорал-яраҡ эшләй башлағас, Брагин быны һиҙеп ҡала...

Бер көн шулай Әминдең тимерлегенә килеп, Брагин уға ҡулдан килмәҫтәй бер эш ҡуша:

- Һин миңә таҡтаташ киҫер өсөн ҡомһоҙ-ниһеҙ генә ҡорос балта ҡойоп бир, шуны эшләй алмаһаң, йәнеңде бирерһең,-ти.

Әмин ҡорос әҙерләй башлай. Брагин, быныҡ эшенән күҙ ҙә алмай, күҙәтеп йөрөй. Төш еткәс, Әминдең ҡатыны килеп, иңбашына таҫтамал һалған булып, ашарға әҙерләп йөрөй. Әмин, ҡатынына асыуланған кеше булып:

- Нәмә һин бында аяҡ аҫтында уралаңып, кешегә эшләргә ҡамасаулап йөрөйһөң!- тип, быныҡ таҫтамалын тартып ала ла утҡа ырғыта. Ә таҫтамалға ҡорос сыныҡтыра торған ҡом төйнәлгән була. Эшен бөтәргәс, Әмин Брагин менән тимерлектән сыға ла балдаҡһын һынап ҡарай: балтаһы ташты ағас һымаҡ киҫә икән.

Шулай итеп, Әмин, Брагинды тишек кәмәгә ултыртып, ҡотолоп ҡала. Бер-ике айҙан инде етерлек ҡорал әҙер булғас, башҡорттар Брагиндан үс алырға йыйыналар. Йәкшәмбе көндәрҙең береһендә Брагин Талҡаҫ күлендә ял итеп ятҡан саҡта, уның һалдаттарына һөжүм итеп, үҙен дә юҡҡа сығаралар.

## Ҡирәй Мәргән менән Брагин

Тау эштәрен эшләтеп йөрөүсе Брагин бер ваҡыт Талҡаҫ күленә яңылыштан балдағын төшөрөп ебәргәс, күлдең бөтә һыуын һоҫоп алырға ҡуша. Юғалтҡан ҡиммәтле бүләген эҙләшергә тип үҙенең приказчигын дә ебәрә. Башҡорттар шулай күлдең һыуын бушата башлайҙар. Был күлде бушата-бушата торғас, ҡарттар үлеп китә, йәштәр аҡ һаҡаллы ҡартҡа әйләнә, ә күл һаман кәмемәй ҙә кәмемәй икән, элеккесә мөлдөрәмә тулы булып тик ята, ти.

Бер саҡ күл буйына эштең нисек барғанын ҡарарға һыбайлы хужа үҙе килеп сыға ла ҡара күҙле, ҡыйғас мыйыҡлы бер егеттең улай ҙа былай буш күнәк менән йөрөгәнен күреп ҡала. Брагин унан, нишләп былай йөрөйһөң, тип һорағас, теге егет көләмһерәп ҡуя ла:

– Һинең ғүмереңде үтәп йөрөйөм,– ти икән.

– Исемең кем һинең, ялҡау егет? – тип һорай бынан Брагин.

– Исемем Мәргән булыр. Һин беҙгә иләк менән һыу ташырға ҡушҡайның, ә мин бына һауа ташыйым, барыбер түгелмәй ни?– ти егет.

Брагин уға ҡамсыһы менән һелтәнгән икән, Мәргән уны эйәренән тартып төшөрә лә, атына үҙе менеп, сабып сыға ла китә, ти. Һаҡсыларының уның артынан мылтыҡ тоҫҡағанын күреп, Брагин:

– Атмағыҙ! Миңә икенсе ат килтерегеҙ ҙә, был атты мин уға бүләк итермен. Әйҙә ул минең ялсым булһын,– тине, ти.

Мәргән был хаҡта ишеткәс, Брагинга килгән дә:

– Миңә бындай эш оҡшамай: күлдең һыуын бушатып бөтөрөп булмаҫ ул,– тигән.

- Ярай, улайһа. Бөтәһе лә әйҙә ҡайтып китһен. Минең балдаҡты ҡул үҙе һаҡлар. Тик бынан һуң күлдән бер тамсы һыу алырға ла рөхсәт итмәйем,- тигән шарт ҡуйған, ти.

Шулай итеп, көн артынан көн үткән. Халыҡ һыуһыҙ интегеп, мал-тыуар ҙа ҡырыла башлағас, Брагин ҡуйған шартҡа түҙеп торор тәҡәт ҡалмаған: күлдән тағы һыу ала башлағандар. Шул саҡ ауылға стражниктәр килеп тулған. Брагиндең әмере буйынса, һәр өсөнсө кешене урамға алып сығып, ҡамсылап йөрөткәндәр.

Алыҫ юлдан ҡайтып төшкән Мәргән, кешеләрҙе туҡмап йөрөүҙәрен күргәс, бер ҡыҙҙы арсалап алырға тип, сабып килеп еткән дә:

- Был минең кәләшем, ҡулығыҙҙы ла тейҙерәһе булмағыҙ!- тигән.

- Мәргән, һин минең кем икәнлекте онотҡанһың. Мин һине быға саҡлы ғәфү итеп килдем, быныһы инде һуңғыһы булыр,- тип, Брагин Мәргәндән үс алырға йыйына.

Быға саҡлы ул һәр туй алдынан һәр егеттең кәләшен үҙенә алып ҡайтып, мыҫҡыл итеп ҡайтара торған була. Хәҙер инде Мәргәндең дә туй көнө килеп етә. Брагин Мәргәндең кәләшенә бик күп бүләктәр алып, пар ат менән ауылға килеп төшә. Был хәлде күреп, халыҡ бик шомлана башлай. Ә Брагин кейәүҙе аяҡтан йыҡҡансы эсертеп, кәләште үҙенә алып ҡайтып китә.

Кәләше әйләнеп ҡайтҡас, Мәргән уны ҡыуып сығара ла үҙе тауҙар араһына ҡаса. Ҡыҙҙы атаһы йортонда ла ҡабул итмәйҙәр. Хәтта әсәһе лә һырты менән тора, ти.

Шулай итеп, байтаҡ ваҡыт үтә. Брагин һаман, халыҡты ҡан илатып, ҡотора бирә. Тик тауҙар араһына ҡасҡан Мәргәндән генә шөрләп ҡуя.

Бер сак Брагин стражниктәре менән Мәргәнде тоторға сыға. Ә Мәргән шуны ғына көтөп ята икән. Быларҙың килгәнен аңдып кына тора ла уҡ менән стражниктәрҙе берәм-берәм ҡырып ҡала. Брагин ҡото осоп күлгә табан йүгерә. Артына ҡарай-ҡарай пистолетенән атһа ла, егеткә атып еткерә алмай. Мәргәндең ҡыуып еткәнен күреп, был тиҙ генә кәмәгә ултыра ла бар көсөнә ишә башлай. Мәргән уҡтан атып, уғы кәмәнең төбөн актарып ташлай ҙа, Брагин күл төбөнә китә.

Күл бер болғанып тулҡына ла, тап-таҙа булып, тынып ҡала.

## Байбул старшина менән Брагин

Таш актартыусы Брагин беҙҙең яктарға батша һымак йөшөгөн, бер кем менән дә иҫәпләшмәйенсә телә̇һә шуны эшләгән, тиҙәр.

Бер сак шулай Иҫәнбәт ауылынан Байбул старшина менән дуҫлашып ала был. Бер-берәһенә кунакка йөрешәләр. Байбул быны, иң кәҙерле кунағы күреп, һый-хөрмәт итә: тәкә һуйып, бишбармак бешертеп, кымыҙ менән һыйлай. Бер көн үҙенең кыҙын кейәүгә бирәсәген, туйға әҙерләнеүен дә әйтеп һала. Ә Брагин, тартынып та тормай, туйҙан бер көн элек бығау үҙенең ак тирмәһен бирөп, кыҙы менән кушырға бойора.

Байбул уйға кала. Брагинде оҙаткас, Әмин, Сура, Исмәғил, Моратша батырҙарына барып, бөтәһен дә төкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Былар, кәңәш-төңәш итешеп алғас, кара йөҙ Брагинде үлтерергә кәрәк, тигән карарға киләләр.

Брагин Талкаҫ күлендә ял итеп яткан бер көндә, башкорттар күлде уратып алалар. Брагин ултырған кәмәгә иң элек Әмин батыр атып ебәрә, теге шунда ук күл төбөнә китә. Брагиндең һаксыларын кырып һалғас, Әмин ауылындағы казармала яткан һалдаттарын да һуйып сығалар. Ә казарманың үҙен ут төртөп яндыралар.

Беҙҙең ауылдың Ғариф тигән бер карты үҙе үлер алдынан минә был хәлдең бер таҡтаташка яҙып калдырылыуы тураһында һөйләгәйне. Имеш, ул таш Талкаҫ күле тирәһенә күмеп куйылған. Тик әлегә был таштың кайҙа икәнлеген бер кемдең дә белгәне юк, имеш.

# Ун ике батыр менән Брагин

Бер заман Әмин ауылының ун ике батыры бергә йыйылып, кәңәштөңәш итешәләр зә, Брагинде бырактырырға кәрәк, тигән уйға киләләр.

Брагин ял итеп яткан Талкаҫ күленә һиҙҙермәй генә барып еткәс, батырҙарҙың береһе - Сура калғандарына әзер торорға куша ла үзе Брагин эргәһенә килә. Тегеһе:

- Ниңә килдең, Сура? - тигәс, быныһы:

- Һинең балык һурпанды ауыҙ итергә килдем,- ти икән.

Брагин уға ултырырға куша. Сура йөгәнләп ултыра ла һиҙҙермәй генә бармағы менән маңлайын һыпыра. Шул сак уларҙың баш осонан ғына ук һыҙғырып үтә. Брагин шунда:

- Һин мине үлтерергә килгәнһең, Сура!- тип кыскырып ебәрә лә биленән пистолетын кармап алырға итһә, Сура уның коралын эләктереп тә өлгәрә.

Брагин куркыуын н кәмәгә югерәп барып, уны ярҙан этә һалып, ишкәген ишә башлағас кына, Сура батыр йәйәһенән уғын атып та ебәрә. Ук Брагиндың күкрәген тишеп үтеп, кәмәнең моронона барып казала. Брагин һыуға колай. Ун ике уксы Брагиндың һалдаттарын да кырып һала. Тик бешексе катын ғына касып котола. Ығы-зығынан файҙаланып, был катын атка атлана ла Ырымбур яғына сабып сығып китә.

Был хәлдән һуң ун ике батыр ҙа, эҙҙәрләүҙән касып, Кустанай яғындағы казак далаһына күсеп китә. Азак батшанан: "Брагин - беҙҙең кеше түгел, ул халык өҫтөнән беҙҙең ихтыярҙан тыш хөкөм кылған. Унан йәбер күргәп кешеләр, бер ниҙән дә куркмайынса, үҙ төйәктәренә кайтып көн күрһендәр",- тигән кағыз килгәс кенә, батырҙар тыуған яктарына әйләнеп кайткандар, ти.

## Кәнифә юлы

Көндәрҙән бер көндө Брагин үҙенең яҡын-ярандары менән Талҡаҫ күле буйында ял итеп ята икән. Шул саҡ быны Әмин, Теmәс, Сура батыр егеттәре уратып алалар ҙа: " Алыш бармы, атыш бармы?!" – тип һөрәнләп, Брагин менән уның һалдаттары өҫтөнә уҡ яуҙыра башлайҙар. Быларҙың бөтәһен дә ҡырып һалалар. Күп тә үтмәй, батырҙар Һаҡмар ярында буш биҙрәләр ултырыуын күреп ҡалалар: Брагиндең хеҙмәтсеһе ниндәйҙер шом барын һиҙенеп, түрәләргә ошаҡларға ҡасып өлгөргән икән.

Батырҙар уйға ҡалып ултыралар ҙа үҙ төйәктәрен ташлап китергә булалар: тиҙҙән үҙҙәре артынан батша һалдаттарының эҙәләп килере кән көүек асыҡ бит инде. Бала-саға, бисә-сәсәләрен алып, төйәнәләр ҙә ҡаҙаҡ далаларына һыҙалар.

Аҙаҡ тикшереү килеп, соҡсоноп ҡараһалар ҙа, Брагинде ултереүселәрҙең эҙенә төшә алмайҙар. Бер ни ҡәҙәр ваҡыт үткәс, ҡасҡындарҙы ярлыҡау хаҡында ҡағыҙ килеп төшә.

Темәс, Әмин, Сура батыр бер йылдан һуң тыуған төйәктәренә кире ҡайтырға булалар. Тик ҡаҙаҡ байҙары Сура батырҙың ун ес йәшлек Кәнифә исемле ҡыҙын ебәрмәйҙәр икән. Сура батыр Кәнифәне ҡасандыр ҡаҙаҡтарға әсир төшкән бер башҡорт әбейенә ун һигеҙ йәшкә еткәнсе тәрбиәләргә ҡушып, унан кейәүгә биреү шарты менән ҡалдырып китергә була. Шуның өсөн ҡаҙаҡтар Сура батырға ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп,, бүләктәр биреп, уны ҡарауыл менән оҙаталар. Ә Темәс менән Әминдең аҫтыҡ малын да тартып алып, икеһен дә йәйәү сығарып ебәрәләр.

Бер заман Һәнифәгә ун һигеҙ йәш тә тула. Тик бағып-үҫтергән теге әбейҙең уны ҡаҙаҡҡа биргеһе килмәй. Һәнифәне ул үҙ иленә ҡайтарып ебәрергә юлға әҙерләй башлай. Бер төндә, бөтәһе лә йоҡоға киткәс, ул уны алыҫ юлға сығарып ебәрә. Оҙатҡан саҡта:

– Бар, ҡыҙым, тик юл ҡырыйлап төндә генә атла. Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо һәр саҡ уң яғыңдан булһын,– тип кәңәш биреп ҡала.

Иртән торһалар, ҡыҙ юҡ, имеш. Ҡаҙаҡтар, атҡа атланып, ҡыҙ артынан ҡыуа төшмәксе булалар. Бына бер саҡ тояҡ тауыштарын ишетеп, ҡыҙ ҡыуаҡтар араһына боҫоп ҡала. Тегеләр быҙың эргәһенән сабып үтеп китәләр ҙә, аҙаҡ, бер кемде лә осратмағас, кире әйләнеп ҡайталар. Ә Һәнифә, көн кисләгәнен көтөп ята ла, бөтәһе лә һил булғас, үҙ юлын дауам итә.

Бер саҡ шулай уны бүреләр уратып ала. Һәнифә шунда, түшләгенән энәһен алып, бармағын энә менән нығытып сәнсә лә бөркөлөп сыҡҡан ҡанын бүреләрҙең береһенә һиптерә. Бөтә бүреләр, кеше ҡанына буялған бүрегә ташланып, уны өҙгөләргә тотонғас, Һәнифә ҡолдан тайғансы ары йүгерә.

Ул шулай бик оҙаҡ килә торғас, аҙашып, юлдан яҙа ла Тамъян-Ҡатай кантонына барып сыға. Бер йылға буйына туҡтап, сәләк и йыйып ашай ҙа үҙенең яратҡан бер йырын йырлап ебәрә. Уның шул тиклем моңло тауышын ишетеп, яҡындағы йәйләү кешеләре килеп етәләр ҙә ҡайҙан, кем булыуын һораша башлайҙар. Тик ул бер ни тип тә яуап бирмәгәс, уны Верхнеуралға илтеп ҡуялар.

Бындағы кантон түрәләре тирә яҡҡа, бер ҡыҙ табылды, тип хәбәр ебәрәләр. Сура батыр был хәбәрҙе ишетеп, Верхнеуралға килһә, был ҡыҙҙың үҙ ҡыҙы икәнен таный ҙа Һәнифәне алып ҡайтып китә.

Бына шул замандан бире Сура батыр ҡыҙы ҡайтып килгән юлды Ҡәнифә юлы тип йөрөтә башлайҙар.

60

## Нилектән Баймак яғында ҡайһы бер ауылдар ике исемле?

Беҙҙең Иҫән ауылын башлап ебәреүсе Иҫән батыр Бөрйән ырыуының Янһары ауылынан була. Иҫән ауылы был тирәләге үтеп сыҡҡыһыҙ урман араһында булып, бынан өс йөҙ йылдар элек үк барлыҡҡа килә.

Иҫән батыр шулай уҡ икенсе ауылға ла нигеҙ һалып, уны үҙенең оло улының исеме менән Атанғол тип атай. Һуңынан ул тағы икенсе исем менән Назар ауылы тип атала.

Был тирәләге 1755 йылғы Брагинға ҡаршы күтәрелгән боланан һуң, батша хөкүмәтенең эҙәрләүҙәренән ҡасырға тырышып, күп ауылдар үҙҙәренең исемен алыштыра башлай. Берәй ауылға батшаның яза ғәскәрҙәре килеп, ауылдың исемен һораша башлаһалар, бер кем дә улар һораған ауылдың исемен белмәмеш булып сыға. "Атанғол ауылымы был?" тип һораһалар, бөтәһе лә: "Юҡ, был Назар ауылы",- тип яуап бирәләр. икән. Язалаусылар бер ни ҙә белә алмайынса, ары китеп баралар.

Бына ни өсөн ҡайһы бер ауылдар беҙҙең яҡта йә Әмин, йә Таш ауылы; Ҡуяндар йәки Сәитбаттал, Аныҡ йәки Бәхтегәрәй, Ноғай йәки Тимер; Атанғол йәки Назар ауылы булып, ике төрлө исем менән йөрөй.

Тел ҡысыҡандин ғына шулай аталмаған икән шул улар!..

# Салауат менән Пугачевтың дуҫлашып китеүе

Салауат батырҙың атаһы Юлай карт волость старшинаһы була. Ыралға батша Петр Федорович /Пугачевты шулай атағандар/ килеп сыккас, Юлай үҙенең башкорттарына:

– Тыуған тейәкте Һәбер-золомдан коткарырға кәрәк,–ти.

Башкорттар шунда, атлы ғәскәр төҙәп, Салауатты баш итеп һайлайҙар ҙа Пугачевка ебәрәләр. Пугачев ул сак Ырымбурҙы камап тора икән. Калаға тукһан сакрымдай калғас, Салауат Пугачев ғәскәрен күрә. Батшаны нисек табырға, тип һораша ла Пугачевка китә. Пугачев:

– Башкорттар ҙа минең менән булғас, бик шәп булды әле. Рәхмәт! – тип, бик кыуанып каршы ала.

Шунда ук Салауатты полковник итеп тәғәйенләй ҙә баш күтәреүселәр ғәскәренә тағы ла күберәк башкорттарҙы йыйып килтерергә ауылдарға сығарып ебәрә. Салауат йыйып килтергән отряд полкка әйләндерелә.

Салауат атлылары Ырымбур эргәһендә батша ғәскәрҙәренә каршы рус казактары менән бергәләп һуғышалар. Һуғыштан һуң Салауат Пугачев менән бергә Илдәк крепосенә барғанда, былар һөйләшеп китәләр. Пугачев уға:

– Һин, Салауат кыйыу батыр икәнһең,– ти.

Шулай итеп улар, Салауат Юлаев менән Емельян Пугачев, бик нык дуҫлашып китәләр.

62

# Илекәй килененең зирәклеге

Илекәй карт минең олатайымдың атаһы булған. Бүгәс менән Салауат яуында һуғышып йөрөгән ул. Яу баҫтырылғас, уны бик каты язаға тарттырғандар: беҙҙең бөтә Казанғул халкы алдында танауын кыркып алырға хөкөм иткәндәр.

Тик язалау башланғансы килене уға бер кәңәш бирер өлгөргән. Күрәһең, кәртнәйем зирәк булғандыр инде.

- Кайным, ауыҙыңа бынау алтын тәңкәне кап та, теге катил бик язалай башлаһа, усына төшөрөрһөң,- тигән был.

Илекәй карт шулай иткән дә. Бының уйын һиҙеп алған теге катил Илекәй карттың танау осон ғына киҫеп алған. Шулай итеп, килененең зирәклеге аркаһында, минең карт олатайымдың танауы киртек кенә булып калған.

# Яу күргән мәсет

Бүгәс яуына саклы беҙҙең Ҡотан ауылын Мәсетле тип йөрөткәндәр. Нигә, тиһәң, уның бик ҙур мәсете булған.

Бүгәс Вознесен зауытын алырға беҙҙән өс сакрымдай ғына Ырғыҙлы ауылына килгәс, үҙенә ғәскәр йыя башлаған икән, беҙҙең Ҡотан муллаһы уға ҡаршы ҡотҡо тарата башлаған: имеш, ул Петр батша түгел, ә халыҡты алдап йөрөгән бер болаһы, диңһеҙ бер кафыр бәндәһе...

Бына шуның өсөн дә Бүгәс беҙҙең мәсетте Ағиҙелдең һул яғындағы тау башынан тороп туптан аттырған, тиҙәр. Шуға ла был тау хәҙер Бүгәс тауы тип атала. Бүгәс йәҙрәләрен мәсет ултырған ҡалҡыулыҡтан яңы ғына таба торғайнылар әле.

Яу баҫтырылғас, Бүгәс емерттергән мәсет урынына яңы мәсет һалған булғандар. Хәҙер уныһы ла юк инде.

## Байҙарҙың заводсыларға ер һатыуҙары

Был хакта миңә атайым һөйләй торғайны, ә атайым үҙенең олатаһынан ишеткән булған.

Үҙәндәге суйын койоу зауытының хужаһы үҙе гел Мәскәүҙә йәшәй, ә зауыттың бөтә эштәрен управляющие алып бара икән. Был башкорттарҙан ер һатып ала, зауыт ерҙәрен киңәйтә, алыш-биреш итә.

Ер һатыуҙа бигерәк тә Юҙашман байҙары Байсура, Юлсура, Ишкужаларҙың даны сыккан була. Улар, бөтәһе лә элек сотник булып хеҙмәт иткәс ни, урыҫ телен якшы беләләр, зауыт управляющие менән һин дә мин һөйләшеп, аксаны йөгө-йөгө менән тайылып алып кайталар.

Ә халыктың ере шулай кәмегәндән-кәмей бара. Быныӊ өҫтәүенә корылык булып, илдә йотлок башлана. Шуны ғына көтөп торғандай, зауыт управляющие килеп төшә лә бөтә башкорттарға ла акса таратып бирә: кайһына – 5, кайһына – 10, ә кайһы беренә 20 һумы ла элегә. Һәр кемә акса алғанлығына кул тамғаһын һалып бара. Ә зауыт хужаһы аҙактан был кағыҙҙы ер һатканлыкка килешеү кағыҙы тип батшаға күрһәтә икән.

Батшаға нәмә – һатканмы, һаткан – ер һинеке, ти. Шулай итеп, халык әллә ни саклы еренән юлак кағып кала. Аҙак эштең ниҙә икәнен һиҙеп калһалар,ҙа, инде эш үткән булып сыға. Шуға ла карамаҫтан, Ишкужа староста ер межаһын тағы ун сакрымдай беҙҙең ауылға табан күсертеп куя.

Бына шунан бирә инде беҙҙең ерҙәр Үҙән зауытына торол кала.

## Алтын ташы

Элек булған был хәл.

Миндәк йылғаһы буйында бер карт бесән сабып йөрөй-йөрөй зә, арығас, хәл йыйып, тамак ялғап алырға була. Был шулай, тағанға кула аҫып, ит бешерергә куйһа, эргәһенә бер юлаусы килеп сыға. Был ят кеше Себер төрмәһенән каскан бер урыҫ икән. Усак янына ултырып, тәмәке тартып, ит бешкәнен көтә башлай. Бик асыккан була. Шунда был усак тирәһендә яткан бер ташты күреп кала ла карттан был ташты үҙенә бирәүен һорай. Карт ни, көлөп куя ла, кәрәк икән, ал, ти. Шунан был, ит бешкәнен дә көтөп тормай, ташты токсайына һала ла үҙ юлына китеп тә бара.

Бер йыл үткәс, был тағы карт янына килеп төшә. Тройка енте-реп, көймәлә генә. Картка бик күп бүләктәр ҙә килтергән була. Бакһаң, теге таш алтын ташы булып сыккан икән!..

# Етлекмәгән алтын

Элек-электән тирә як ауылдар һәр йәй һайын Түбә эргәһендәге туғайға йәйләүгә сыға торған булғандар.

Шулай бер төндә кетәүселәр ҡарағас менән ҡапланған тау башында ниндәйҙер күгелйем бер яҡтылыҡ күреп ҡалғандар. Икенсе көн иртән шул урынды барып ҡараһала , бер ҙә иҫ китерҙәй нәмә юҡ икән. Бар тик яңы ғына өңөлгән йомран өңөн күргәндәр. Ә ҡарттар килеп ҡарағас, бында алтын булырға тейеш, тик әлегә ул етлекмәгән, тигәндәр.

Борондан килгән ғәҙәт буйынса, "етлекмәгән алтын" сыҡҡан ерҙе ҡол менән күмеп ҡуйырға кәрәк икән. Ниндәй ҙә булһа берәй йән эйәһе шунда ҡәҙен ҡалдырһа, ул, имеш, ҡорбан булырға тейеш.

Бер ваҡыт Түбә башҡорттары бөтә ырыуҙары менән йәйләүгә сыҡҡас, ошо алтын хаҡында бәхәс киткән: алырғамы, был алтынды, юҡмы? Күбеһе, алайыҡ, тигән. Шулай ҙа ер таланыуҙан биҙрәп бөткән иң оло аҡһаҡалдар ҡаршы төшкән, был алтынға әлегә ҡағылмай торайыҡ, юҡһа ырыуыбыҙға бәлә-ҡаза килеүе бар, тигәндәр.

Шулай ҙа йәштәр тыңламаған. Аҙаҡ, ерҙең йөҙөн йыртып,был тауҙа Түбә прискаһы үҫеп сыҡҡан.

## Түбә прискаһының асылыуы

Алтын-көмөш әсәй төрлө илдәрзең батшалары беренсе донъя һуғышын башлап ебәргән йылда хәзерге Түбә рудниге булған ерзә күрше ауылдың бер татары ер өстөнә сығып ятҡан самородок табып ала. Таба ла тикшертеп ҡарарға тип Баймаҡҡа саба. Тикшереп ҡараһалар, был бик бай алтын ташы булып сыға.

Был хәлдән һуң ике йыл да үтмәй, Түбәгә еңел машинаһы менән елдереп Кабанов тигән түрә килеп төшә. Тирә як ауылдарзың башҡорттарын йыйып алып, был зур мәжлес ойоштора. Дүрт һыйыр һуйзырып, бишбармаҡ бешертеп, халыҡты араҡы менән һыйлай, һәр кемгә әсмүхә-әсмүхә сәй бүләк итеп сыға. Ә үзе башҡорт байзары менән типтереп, озаҡ та һөйләшеп тормай, Түбә ерзәрен 75 йылға арендаға алып торорға тип, килешеү ҡағызы төзөлә лә ҡайтып та китә. Тиззән был бай капиталист Түбә ерендә шахта ҡаздырып, алтын сығарта башлай.

Шулай итеп, был мәжлес башҡорттарға бик ҡиммәткә төшә.

# Сибай карьерының тарихы

Бынан йөҙ йылдар элек Иҫке Сибай ауылының бер һунарсыһы хәҙер Сибай карьерының төньяғында көҙән өңөн ҡаҙый. Ҡаҙыған еренән гел генә ҡыҙыл балсыҡ сығып, үҙе бик тос, ауыр булғас, был аптырап ҡала. Тик балсыҡтың баҡыр колчеданы икәнен башына ла килтермәй. Көҙәнде эләктергәс, өңөн дә күмеп тормай, ҡайтып китә.

Ауыл халҡы аҙаҡ көҙән өңөнән сыҡҡан был ҡыҙыл балсыҡ менән төрлө ағас әйберҙәрҙе, тирмә таяуҙарын буята башлай. Көндән-көн, йылдан-йыл был соҡор киңәйә, тәрәнәйә бара.

– Көҙән шалы шәп булып сыҡты әле,– тиҙәр ауылда. Аҙаҡ был буяҙың ни булып сыҡҡанын ҡарт таусылар былай тип һөйләй торғайны. Имеш, 1912 йылда Яңы Сибай ауылының кешеһе Әмир Хоҙайбирҙин был әкәмәт балсыҡты Кабановка күрһәтә була. Бының өсөн унан бер ҡаҙаҡ сәй ҙә алған, тиҙәр. Ә Кабанов, әлбиттә, уның ниндәй "ҡыҙыл балсыҡ" икәнен яҡшы белгән була.

Балкантау прискаһында

Беҙҙең Байрамғол ауылынан Ғәбдрәфик тигән егет Рәмиевтәрҙең Балкантау прискаһында эшләп йөрөгән була.

Төнгө сменала уға, иптәше ауырып китеп, бер сак үҙенә генә ҡалырға тура килә. Был шулай, арып-талып,кәйләһе менән теләр-теләмәҫ кенә һелтәнеп ултыра торғас, кәйләһе ниндәйҙер ҡаты бер нәмәгә барып тейә лә ҡараңғы забойҙа ҡояш нуры балҡып киткәндәй була. Был тиҙ-тиҙ генә ерҙе аҡтарып ҡараһа, ҙур бер самауыр саҡлы самородок килеп сыға. Әмәлгә ҡалғандай, шунда уҡ нарядчик те килеп етә. Был Ғәбдрәфикте, үҙ атына атландырып, Рәмиевкә саптыра. Күп тә үтмәй, уныһы полиция эйәртеп, тройкаһы менән килеп төшә. Самородокты, бик һаҡ ҡына өҫкә алып, сығып, кәймәгә һалалар. Алтын ҡойолмаһына прииска хужаһы үҙе атланып ултыра ла, Ғәбдрәфиккә егерме биш һум аҡса биреп, имениеһенә елдереп, ҡайтып та китә.

Ә теге нарядчик бынан һуң бик байып ҡалған, тип һөйләйҙәр.

# <u>Ҡорто күп тә, балы юҡ</u>

Тамъян-Ҡатай кантонында элек Ибраһим тигән бер башҡорт була. Ул көнө буйы урмандан ҡайтмай, ҡырағай бал ҡорттарына туба[л] оялар яһап, солоҡсолоҡ менән көн күрә икән.

Һәр саҡ ҡорттан сағылып, бите-ҡулы аяуһыҙ шешенеп йөрөһә лә, Ибраһим бик сабыр, үҙ кәсебенең бөтә михнәттәренә лә түҙер кеше була. Кирәм менән ағас баштарына аҫ һымаҡ үрмәләп менеп китә лә балды ботлап-ботлап ҡайырып алып төшә. Үҙенең бала-сағаһынан артҡан балды, Иҙелбаш заводына илтеп, кәрәк-ярак тимер-томорға ла алыштырып ҡайта икән был. Сөнки ул заманда башҡорттарға тимерлек тоторға тыйылған була. Салауат яуынан һуң әбей батша быласы башҡорттар тағы ҡорал-фәлән ҡоймаһын, тип, тимерлектәрҙе бөтөрөү хаҡында айырым указ да сығара. Шунлыҡтан башҡорттар тимер-томор алырға яҡындағы Иҙелбаш заводына йөрөй торған булалар /ул саҡта Белорет заводын шулай атап йөрөткәндәр/. Заводтың эше менән Яков тигән берәү етәксеһек итә икән.

Бер көн шулай Ибраһим заводҡа барһа, был уны заводҡа эшкә күсергә ҡыҫтай. "Һинең кеүек уңған кешенән шәп оҫта сығыр ине", ти.

Юҡә сөй кемгә килешмәй инде - Ибраһим тота ла риза була. "Тимер тотҡан тилмерһәҫ",- тип, был шулай тимер цехында эшләй башлай.

Урман еләҫендә йөрөгән кешегә был цех тамуҡ төрҙөһөҙ эҫе икән. Ауыр һыу балғаһы килтереп һуҡҡанда, тимер ҡаҫмаҡтары төрлө яҡҡа баҙлап осоп тора. Тәнде өтөп, бал ҡорттары һымаҡ сағып алғанда, ҡайҙа һыйыныр ер тапмай, Ибраһим был эшкә тотонғанлығына бик үкенә. Шулай ҙа был тамуҡ [illegible]

йөрөй. Тик Яков знакумы быға эш хакы тип бер ус бакыр тәңкәләр тотторғас, Ибраһим уның бакырҙарын аяк аҫтына атып бәрә лә кайтып китергә була.

Яков бынан: "Ниңә, Ибраһим , былай иттең әле?"- тип һорағас, был: "Юртоғоҙ куп булһа ла, балы юк икән шул",-тигән, ти.

Был хәл 1836 йылда, бынан йөҙ утыҙ йылдар элек булған,тиҙәр. Ә хәҙер Ибраһимдың ейән-ейәнсәрҙәре зауыт тулы.

## Иҫерәктәр ерһендә

Әүжән-Петров зауытында әлек, революцияға тиклем, төрлө хужалар булып китте. Бәтәһе лә шуларҙың эсергә ярата торғайнылар. Шулай ҙа эсеү буйынса Гюви тигән французҙан да уҙырғаны булмаҫ. Бер сак зауытта янғын сығып китте, ә ул лах иҫерек көйө, ауыҙын йырып, көлөп йөрөнө шунда.

Тирге йылғаһы буйында колон һөйләй торған еле бар ине. Зауыттыкылар уны кордон тип йөрөтә торғайнылар. Мин атайым менән, Фәйзулла кустым менән өсәүләп әнә шул кордонда ятып, түрәләрҙең тайҙарын караныҡ.

Зауыттың управляющие әлеге шул Гюви тигән француз был урынды бик окшатты, ахыры - дачаһын да шунда һалдырып ҡуйҙы. Көн һайын тиерлек ҡунактар өҙөлмәй, оркестр уйнап торор ине. Ә эскән шампанскийҙәре Тирге йылғаһынан кәм булмағандыр. Бер сакырым ерҙән үк шарап еҫе аңкып торор ине... Былар шулай шәп аттар менән килеп төшәләр ҙә мылтыктан атып ебәрәләр. Мылтык тауышына атайымды, беҙме, - кем алдарак ҡаршы сығып, аттарҙы дуғара, шуға ике тин көмөш әләгә. Мин инде бик йәш булмаһам да, һәр сак тиерлек алдарак сығып өлгөрә торғайным.

Бер сак шулай Фәйзулла кустым алдарак сығып, Гювиҙең ике тинен эләктереп тә өлгөрҙө. Беҙ шунда һуғыштык та киттек. Мин уның танауын емереп, колактарын йыртып бөтөрһәм дә, ике тин, тәки, Фәйзулланың ҡулында калды. Беҙҙең шулай әтәсләнгәндә француз Гюви рәхәтләнеп карап торҙо.

Бер көндө ул минө кунактары менән акланға алып сыкты. Унда улар тәрилкәгә ашыкканда, мин уларға тәрилкәләрҙе һауаға сөйөп торорға тейеш инем. "Кем яза атһа, шул һиңә бер һум бирәсәк",- тине Гюви. Былар, эсеп, жыймаса булып алғас, атыш башланды. Иң элек Гюви үҙе атып ебәрҙе. Был шулай атып тора, тәрилкәләр сәсрәп тора. Ун тәрилкәнең башына етте, ә миңә һукыр тин дә эләкмәне.

Икенсеһенә сак жуҙғалып йөрөгән бер кап корһак түрә сыкты. Мин тәрилкәне ырғытып ебәрһәм, ул әле мылтығын да күтәреп өлгөрмәй. Икенсе тәрилкәне ырғытыуға ул инде атып та өлгөргән була. Бының мыжмырлығы минең файҙаға булды - тотош бер һумды уска йомдом. Шул сак Гюви минең янға килде лә:

- Уның тура атыуҙа хайғыһы юк, һин, Аҙнабай, бына шампанскийҙе ырғытып тор. Яҙа атһа, бөткәнсе эсерербеҙ. Күпме яҙлыға, шунынса шешәне эсергә тейеш,- тине.

Мин бер кәрзин шампанскийҙе һөйрәп килтерҙем дә ырғыта башланым. Бишге ырғыттым, ә теге капкорһак береһенә лә тейҙерә алмаһы. Түрә кунактар:

- Бөтәһен дә эсереп бөтерергә! - тип геүләшә башлағайныдар, был капкорһак ағас араһына жасып инеп китте. Тегеләре бының артынан югерешге. Бының аҙағы ни менән барып бөткәндер, тик береһе лә акланға кире әйләнеп килмәне.

Беҙ Фәйзулла менән көттек-көттек тә, түрәләр килмәгәс, бөтә шампанскийҙе йыйып алдык та күрше ауылға һыҙҙык. Шунда, бөтә ауыл егеттәрен һыйлап, үзебеҙсә, йырлашып-көлөшөп, мәжлес короп ултырҙык.

Аҙак был еле-кардон иҫеректәр кардоны булып калды. Пардон!..

## Абдулла һалдат менән Николай батша

Бер саҡ шулай беҙҙең өйгә бер башҡорт ҡарты атын саптырып килеп туҡтаны ла, ҡарсығым ауырып китте, тип, мине Һаҡмар буйындағы ауылына алып ҡайтты. Фельдшер ҡулынан ни килә, мин шуны эшләгәс, ҡарт мине кире алып китте. Беҙ, атты ашыҡтырмай ғына, оҙаҡ килдек. Юлда нәмә хаҡында һөйләшеп килә торғас, һүҙҙән һүҙ сығып, ҡарт миңә шундай бер хикәйәтте һөйләп ташланы.

Имештер, Абдулла тигән бер башҡорт һалдаты Николай Беренсегә 25 йыл хеҙмәт итә. Хеҙмәте бөтөп, ҡайтыр ваҡыты еткәс, был Невский проспекты буйлап иркенләп бер йөрөп килләйем әле, тип ҡалаға сыҡҡан. Шунда быға бер таныш генералы осрап:

– Нәмә, Абдулла, хеҙмәтеңде тултырҙыңмы инде?– тип һораған, ти.

– Эйе, – тигән Абдулла.– Бына ҡайтып китергә яңы итек менән шинель дә бирҙеләр әле.

– Һин был тиклем тырыш хеҙмәтең менән ҙурыраҡ бүләккә лә хаҡлыһың, батшаның үҙенә кермәй ҡайтма,– тип кәңәш биргән быға генерал.

Икенсе көндө Абдулла батша һарайына килгән. Вәзирҙәре батшаға хәбәр иткәс, батша быны индерергә ҡушҡан. Шулай итеп, Абдулла һалдат батша ҡаршыһында ултырып, бөтәһен дә әнеһенән өбөнәсә һөйләп биргән. Батша, йылмайып:

– Һин ниндәй бүләк теләр инең: аҡсамы, ерме?– тип һорағас, Абдулла уйға ҡалған. "Байлыҡ – бер айлыҡ, ә ер – мәңгелек", тип, ете үлсәп ҡарағас, ер һорарға булған. Ә батша уға:

– Күпме ер кәрәк, бына бынау картанан күрһәтеп бир,– тигәс, Абдулла кәрәктәй ҡулы менән картаға баҫҡан да:

- Бына ошо ус ояһындай ер булһа, бик еткән миңә,- тигән. Батша шунда үзенең ярандарына Абдулла басҡан ус ояһындай ерҙе үлсәп, уға шуның һыҙмаһын күсереп бирергә ҡушҡан.

Шулай итеп, Абдуллаға бик күп Бөрйән ерҙәре эләккән. Был бик байып киткән. Байлығы улдарына ла, улдарының улдарына ла етерлек булған. Тик ейәндәренең улдары - бүләләре, ерҙе купецтарға буш кына хакка һатып, хатта батша үзе бүләк иткән теге һыҙманан да ҡолак ҡағып ҡалғандар. Һуңынан уларҙан ҡалған быуындары Абдулла ҡарттың батша мөһөрө төшкән теге һыҙманы күпме генә кире һатып алырға тырышһаһын, бер ни эш тә ҡыра алмағандар.

Киткән кире ҡайтмай шул. Бүләкте һатыу ярамаған эш. Ә ер бит ул донъялағы иң ҙур бүләк. Батша бүләге генә түгел, хоҙай бүләге. Шуға ла бит борон беҙҙең атай-олатайҙар, йәнен бирһә биргән, ерен ятка бирмәгән. Йырҙа ла ана шулай тип йырлана...

Камал каскын

Бынан ике йөҙ йылдар элек беҙҙең Иҙел башы яктарында Камал исемле бик батыр бер егет булған. Ул Бүгес менән Салауат яуҙарында катнашып йөрегәс, уны тотоп алып, аяк-кулын бығаулағандар ҙа баструкка ултырткандар. Шулай ҙа Камал баструктың мөрйәһенән сығып каскан. Бик оҙак ил гиҙеп йөрөй торғас, тыуған ауылына кайтып еткән. Аяк-кулынан бығауҙарын бысып алғандар быныӊ. Тик ауылда оҙак торорға ярамағанлыктан, Камал урманға касып китеп, юлбаҫар булып йәшәргә карар иткән.

Камад ярлы-ябағайға, етем-еҫергә тырнак осон да тейҙермәй, тик бай-түрәләрҙе, купец-сауҙагәрҙәрҙе генә талап йөрөй икән. Шуға ла улар уны батша һалдаттарына тотоп бирмәксе булалар.

Бер сак шулай йыһанша тигән карат байы , Камал артынан төшөп, кыуып килә торғас, уның аяғын яралай. Ярала көйөнсә лә Камал унан касып котола. Кеше аяғы баҫмаған ике тау егендәге бер мәмерйәлә ул үҙенә төйәк короп, шунда йәшәй башлай. Кәләш йөрәшеп, уны ла шул тау кыуышына алып китә. Был тау еген әле лә Камал култығы тип йөрөтәләр.

Камал шулай йыш кына ауылына кайтып йөрөй. Ауылға инер алдынан ул һәр сак курайын һыҙҙырып ебәрер була. Кныӊ курайҙа шул тиклем моӊло уйнауын ишетеп, ауылдыӊ ярлы-ябағайы Камал кайтып килгәнен әллә кайҙан ук һиҙеп, йәше-карты - бөтәһе уға каршы сығып, аҙык-түлек, кейем-һалым бирел ебәрер булған.

Камалды бик оҙак вакыт бер кем дә тота алмай. Шулай ҙа бер көндө уның кайтып килгәнен аӊдып торған стражниктәр йот-

ҡар ауылы аръяғында атып үлтерәләр. Кәүҙәһен Йылға ярына ҡом менән күмеп китәләр. Камалдың үҙенән бер аҙым да ситкә китмәй йөрөй торған саптар аты менән ерән бурҙайы була. Атын стражниктәр тотоп алып киткәс, бурҙайы өс көн буйы Камал ҡәбере өҫтөндә шыңшып илап ята. Тик аҙаҡ кемдер бурҙайын да атып китә.

# Айсыуаҡ ҡаскын

/вариант/

Айсыуаҡ бик тә ҡыйыу, сая ҡаскын була. Ул бынан туҡһан йылдар элек хәҙерге Бөрйән районының Әттик ауылында йәшәгән. Әттик ауылы бынан Ағиҙел үрендә егерме ете саҡрымда ғына.

Канинникольский зауытының управляющие уны тоторға маташып ҡарай. Сөнки ул зауыт аттарын әйҙәп алып киткән була. Тик Айсыуаҡ бер үзе генә йөрөмәй. Уны тотош бер отрядтең атаманы булған, тиҙәр.

# Айсыуак мажаралары

Айсыуак – минең олатайым ул. Бик тә көслө, бик тә батыр була. Бер сак ул Канинникольский заусытының бай түрәһе менән бәхәскә керә.

– Әгәр ҙә бөгөн төндә минең атымды урлай алһаң, күп алтын бирәм, кулыңдан килмәһә – һин үҙең бирәһең,– тигән.шарт куя был түрә.

Айсыуактың алтын түгел, ашарлык ризығы ла булмағас, тәүәккәлләргә була. Бай түрә, атын һарайға бикләп, аяктарын бығаулы йоҙак менән тышап куя ла үҙе йокларға инеп китә. Карaңғы төшкәс тә Айсыуак һарай башына менә лә, түшәм тактаһын һарайҙың эс яғына һөйкәп, аҫка төшә. Тиҙ генә бығаулы тышауҙы сисеп, атты кырын такта буйлап өҫкә мендерә лә, тышка һикертеп, сабып сығып та китә. Иртән һарайҙы асып карaһалар, аттан елдәр иҫкән була. Шулай итеп, ат та, алтын да Айсыуакка эләгә.

Айсыуак йыш кына һунарға сығып йөрөй торған була. Бер сак ул шулай бер алып кайткан төлкөһөн бер үк кешегә ете кешегә һатып:

"Бер генә кат тоттом,<br>Ете кабат һаттым",–

тип, һамаклап килә икән. Шунан һуң халык араһында: "Айсыуак ул әҙәм затынан түгел, шайтан затынандыр",– тигән хәбәр таралып китә.

Ә бер мәл шулай ҙа була: Айсыуак тиң-тоштары менән һунарға сыккас, бер айыуҙы күреп кала ла уның колактарынан кыҫып алып, айыуҙың аркаһына атланып ултыра. Айыуҙы үкертә-үкертә, был шулай айыуға атланған килеш иптәштәре алдына барып сыға...

Каниникольский зауыҙының стражниктәре Айсыуакты тотоп алып үлтерергә йыйыналар икән. Был кыш көнө була. Айсыуак, саңғыларын кейеп, урманға каса. Артынан кыуып етеп килгәндәрен күргәс, саңғыһы – ние менән был куйы ботаклы бер [illegible] бейек карағай башына менә лә китә. Тегеләр быны ң кайһы ботакты ултырғаның да күрә алмағас, карағайҙы кыркып ауҙара башлайҙар. Айсыуак ауып барғанда карағай осонан,тейен һымак, һикереп төшә лә саңғыһы менән шыйлатып урман эсенә инеп тә китә. Тегеләр Айсыуакты ағас баҫты тип уйлайҙар. Карағай төбөнә ултырып, тәмәкеләрен борлаталар ҙа, карағай ботактарын ботарлап, кар аҫтынан Айсыуактың кәүҙәһен эҙләргә тотоналар. Капыл шунда урман араһына инеп киткән саңғы эҙе күренеп кала. Былар, шулай аптырашып, буш кул менән кире кайтып китәләр.

Шулай ҙа бер көн килеп Айсыуак тотола. Уны сиркәү башынан ырғытып үлтерергә хөкөм сығаралар. Становой ҙа килеп етә. Айсыуакты бейек манара башынан ташлаһалар,ул осоп төшәп, аяғы ергә тейҙе генә тигәндә, атлап сыға ла китә. Был хәлде күреп, уны тағы бер кат ташларға булалар. Ул тағы оса-оса ла, аяғы ергә тейгәс кенә, йүгереп сыға ла китә. Шулай итеп, Айсыуакты барыбер үлтерә алмайҙар.

Ул аҙак, картайып, үҙ әжәле етеп кенә үлә.

## А.Г. Бессонов яҙып алып тәржемә иткән хикәйәттәр

/Рәми Ғарипов кайтармаһында/

### Башкорттарҙың килеп сығышы

Урал һыртының был яғында йәшәгән башкорттар Урал һыртының теге /көнбайыш/ яғынан күсеп килгән. Башкорттар килеп ултырғансы, бында берәй төрлө халык йәшәгәндерме, юкмы – уныһы билдәһеҙ.

Киҙәгәс күле буйының ике яғында уба тип йөрөтөлгән ике түбә калкып тора. Ошо убаларҙың ырҙын табағына окшап яткан урындарында кәберлектәре лә бар. Борон-борондан тиреҫ яктағы убаны Егет батша убаһы тип, ә төшлөк яғындағыһын кыҙ батша убаһы тип йөрөтәләр. Имеш, был тирәлә улар икеһе батшалык иткән бул[illegible]

Әле кәләш тә йәрәшмәгән Егет батша кыҙ батшаға: "Миңә кейәгә сығыр булһаң, кәләшлеккә алыр инем",– тигән икән, кыҙ батша быға шундай шарт куйған: "Былай ғына сыға алмайым, тәүҙә батырлығыңды күрһәт. Мин был түбәнән, ә һин анау түбәнән тороп, ук атышып карайык. Әгәр ҙә һин тейҙереп, мин иҫән калһам, бөт ғәскәрем менән һиңә сығырмын; ә инде яҙлыкһаң, бөтә ғәскәрең менән һин миңә кол булырһың",– тигән, ти, кыҙ егеткә.

Былар шулай, икеһе ике түбәнән тороп, ук атыша башлайҙар. Башта егет ата. Ук кыҙҙың аяғын ғына сыйып китә. Шунан кыҙ атып ебәрә. Быңың уғы егеттең йөрәгенә килеп тейә лә, егет шунда ук йән бирә.

Егет яғындағы майҙанда ултырған карттар, был хәлде күргәс: "Кыҙ коло булғансы, алышып үлгәнең артығырак",- тиҙәр ҙә атыша башлайҙар. Алышта ике яктан да бик күп кеше кырыла. Ахырҙа, Е Егет батша яғындағыларҙың иҫән калғандары: "Былайтып кырылып бөткәнсе, кыҙ батшаның коло булайык та калайык",- тиҙәр ҙә кыҙ батшаға баш һалалар.

Үлгәндәрҙең бөтәһен дә йыйып алып, яу коралдары, кейем-һалымдары менән бергә, ошо үлгән ерҙәрендә, ике түбә башында, ерләйҙәр.

Был хәлдән һуң кыҙ батша бик күп ерҙәргә яу сабып, ул ерҙәрҙең бик күп батшаларын үҙенә кол итә. Ахыр килеп, ул тағы бер йәш батшаны осрата. Был егет кыҙ батшаға: "Һин байтак халыкты кырҙың, әйҙә хәҙер минең менән алышып кара",- ти. Былар шулай һөйәк һаплы айбалталарын болғап,кара-каршы сабышып килеп,аттары бер-береһенә сак кына каклығыу була, егет менән кыҙҙың аты икеһе ике якка сәсрәп барып төшә лә төшкән ерҙәренән тора ла алмай. Егет шунда кыҙҙы һалып осора ла, быға торорға ла ирек бирмәйенсә, күкрәгенә менеп ултыра. Үҙе шунда кыҙға: "Кайһына ризаһың: йәнеңде бирәһеңме, малыңды бирәһеңме? Йәнең йәл булһа, минең бисәм бул, йәл булмаһа, хәҙер йәнеңде алам!" - тип, икенең берен һайларға куша. Кыҙ, йәнен йәл күреп, ахырҙа быға кәләш булырға ризалык бирә, ә ғәскәре егеткә коллокка кала.

Ана шул замандан тороп калған был түәбәләр. Беҙҙең тирәлә уларҙы түбә тип тә, уба тип тә йөрөтәләр. Бына ошо уба-түбәләр ук атышырға мәрәйб булған, тиҙәр. Мәрәй тип шулай ук атырға сәп булған урынды әйтәләр инде.

Ә бындағы халыктың кайһы шунда үлеп бөткән, кайһы кайҙа күсеп киткән. Шунан һуң был ерҙәргә Урал аръяғынан башкорттар

килеп ултырған. Ул хәл былай булған .

Имеш, Әй йылғаһы буйында көн иткән Биксәнтәй исемле башкорт картының бер заман шулай малдары юғала. Шуларҙы эҙләргә карт үҙенең улын сығарып ебәрә. Улы малдарҙы эҙләп йөрөй торғас, Урал Һыртының был яғына килеп сыға. Малдарҙы табып, атаһына әйләнеп кайткас: "Унда бер ниндәй ғәскәр-фәлән дә юк, ере лә бик якшы, тигеҙ ер,- әйҙә, атай, шул ергә күсеп ултырайык!"- тип кыҫтай башлай. Ә бығаса Әйҙе башкорттары: "Урал арьяғында ер ҙә юк, донъя шунда барып бөтә икән",- тип йөрөр булғандар. Биксәнтәй карт: "Бәй, былай булғас, Урал арьяғында ла донъя бар икән дәһә!" - тип куя. Шунан, уландарын йыйып алып,кәңәш төңәш итешә лә был якка күсенеп ултыра. Уның ун ике улы булған була. Ун икеһен дә ул башлы-күҙле иткәс, төрлөһө төрлө ерҙән урын һайлап, һәр берәһе үҙ донъяһын короп ебәрә.

Биксәнтәй карт бик бай була: үҙенең мал-тыуары менән ул Урал Һыртының көнтыуыш тирһененән алып казактарҙың Аман-карағай урманына[3] тиклем йәйелеп яткан аралыкта күсенеп йөрөй. Ул шулай бер сакта Аман-карағай урманы тирәһендә йәйләүҙә ятканда казактар бынан: "Ике кыҙыңды беҙгә бир",- тип ынйыша икән. Биксәнтәйҙең ике улы кыҙҙарын казакка бирергә риза булмағас, быларҙың икеһен дә әсирлеккә эләктереп, кол итеп куйлар. Был ике ул да бик батыр булған була.

Бер ни тиклем вакыт үткәс, казактар төрлө ярыш-бәйге уҙғармак булып, ҙур йыйын йыйлар. Был ике батырҙы шунда үгеҙ менән алышырға сығаралар. Ике туғандың кесеһе, майҙанға сығып, үгеҙҙең ике мөгөҙөнән эләктереп ала ла икеһен дә кайырып килтереп сығара. Ике мөгөҙ ҙә бының кулдарынан төшмәй торғас, ағаһы, кустыһының кулдарынан һылап-һыйпап, мөгөҙҙө сак төшөрә.

Был хәлде күргәс, ҡаҙаҡтар кәңәш-төңәш итешәләр ҙә: "Былар беҙҙең халыҡты үҙ яҡтарына ауҙарып ҡуймаһын",- тип, ҡурҡыштарынан ике батырҙы ла кире ҡайтарып ебәрергә булалар.

Шулайтып, Биксәнтәй ҡарттың ун ике улынан Әйҙе ырыуы тип йөрөтөлгән ун ике ауыл таралып китә: Мәтәлө, Үләнде, Оло Ҡарағай ҡул, Субраш ауылы, Собханғол ауылы, Кесекәй Ҡарағайҡул, Морат ауылы, Юм-сул ауылы, Оло Олторак менән Кесекәй Олторак ауылы, Бөтөк ауылы, Ҡужа ауылы. Быларҙың бөтәһен дә әйҙеләр тип йөрөтәләр.

Әйҙеләрҙән алда был ерҙәргә Табын ырыуы килгән, әйҙеләр Табындарҙың еренә ебәрелмеш кенә тип тә һөйләйҙәр. Нисек булһа ла булғандыр, тик әйҙеләрҙең дә, Табындарҙың да һәр береһенең хәленә ҡарата үҙ ерҙәре үҙҙәренә етерлек бик мул булған. Шулай ҙа был яҡтағы алтын-көмөшлө, мәғҙән-тимерле, күлдәре күп ерҙәр табындарға ҡараған. Табындарҙың бында ҡасанырак килеп ултырғаны билдәһеҙ.

Ә Ҡатай менән бөрйәндәр – беҙҙән башҡа ырыуҙар, телдәре лә, ғөрөф-ғәҙәттәре лә беҙҙекенән айырылып тора; уларҙың һөйләшеүе, ғөрөф-ғәҙәте ҡырғыҙ-ҡаҙаҡҡа[4] тартымыраҡ. Улар ҡайҙан килеп сыҡҡандыр – уныһы беҙгә ҡараңғы...

---

[1]Бында һүҙ Силәбе, Троицк, Шадрин, Екатеринбур һәм өлөшләтә Верхнеурал өйәҙҙәрендә йәшәүсе Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары тураһында бара.

[2]Уба – ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ, башҡорт, татар һ.б. төрки халыҡтарҙағы ҡурған атамаһы.

[3]Әй- башҡортса Әйҙе лә тиҙәр – Златоуст өйәҙендәге Йылға, Урал

һыртының көнбайыш итәктәренән баш алып, Һәриҙел йылғаһына ҡоя.

[4]Аман-Ҡарағай урманы – Тырғай өлкәһенең Ҡустанай өйәҙендә.

[5]Урал һыртының көнсығыш итәктәрендә йәшәүсе төньяҡ һәм көньяк башҡорт ырыуҙары араһында бөтөнләй бәйләнеш юҡ тиерлек. Шуға күрә хикәйәтте һөйләүсе Мәтәле башҡорто, Ҡатай менән Бөрйән ырыуынан тыш, Үҫәргән, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ һәм башҡа башҡорт ырыуҙарын телгә лә алып тормай. Ҡатайҙар Верхнеурал өйәҙенә ҡараған Ҡатай волосының төньяк-көнбайыш өлөшөндә һәм Стәрлетамаҡ өйәҙенең төньяк-көнсығыш өлөшөндә, Оло Инйәр менән Кесе Инйәр буйында, йәшәй.

/А.Г.Бессонов иҫкәрмәләре/.

Был иҫкәрмәләрҙе хәҙерге территориаль бүленеш атамалары һәм Әй-Йөрүҙән буйы башҡорттарының Табын ырыуына бәйләнеше хаҡында "Башҡорт шәжәрәләре"ндәге мәғлүмәттәр менән дә тулыландырырға кәрәктер? /Р.Г./.

# Әйҙәләр менән табындар

Әйҙәләр бында табындарҙан элегерәк килгән. Уларҙың ҡайһылары аҫаба булып киткән, ҡайһылары ебәрелмеш булып ултырған. Нисә, тиһәгеҙ, был хәл шунан килеп сыҡҡан.

Ысынмылыр, түгелме , - имеш, табындар Урал Һыртының теге яғынан килгән, тип һөйләйҙәр; ҡара-табындар менән бәра-табындар[1], имеш, бында Уй йылғаһының башынан күсеп ултырған, тип тә әйтәләр. Тик шуныһы билдәле: ике яҡты ла - әйҙәләрҙе лә, табындарҙы ла бер саҡ  аҡ батша[2] үҙенә саҡырып ала. Бөтәһе үк ике кеше китә. Әйҙәләр ебәргән кешеләр батшаға барған ерендә үлеп ҡала, ә табындыҡылар кире әйләнеп ҡайта.

Аҡ батшанан улар, бөтә был ерҙәр һеҙҙеке, тигән ҡағыҙ алып ҡайта. Әнә шул ҡағыҙҙа бөтә бәлә лә инде...

---

[1] Ҡара-табындар менән бәра-табындар - бер үк табын ырыуының ике тармағы.

[2] Был осраҡта башҡорттар Иван Васильевич Грозный батшаның күҙ уңында тоталар.

А.Г.Бессонов яҙҙырмаһы.

## Йәзгәр тауы

Борон бер карт булған. Уның сабынлык ерәнә бер урыҫ аттарын ебәргән икән. Был шунда атып Яйҙак кына менә лә теге урыҫ янына сабып килә. Килә лә:

– Үксәңде майла бынан! – ти икән тегегә. Урыҫ ни, быныӊ бер һүҙен дә аңламаған, ни һөйләй икән тип көлә лә куя, ти. Шунан һуң был ауылға кире сабып кайта ла, урыҫса бик шәп беләләр, тип, кейәүен алып килә. Кейәүен килтергәндә, теге урыҫ һаман быныӊ сабынлығын тапатып йөрөй икән. Кейәүе лә быға:

– Был бит Йәҙгәр туғайы, ниңә тапатаһың сабынлыкты? Ә Йәҙгәр туғайы минең кайнатайымдың ере!– тип, башкортса һыпырта,ти. Тегенеӊ һаман да көлөү тик торғанын күргәс:

– Ниңә ауыҙыңды йыраһың, әллә тукмак ашайһың киләме?– тип куркытмаксы булған кейәүе. Тик теге урыҫ "тукмак ашауҙан" да курҡмағас, кейәү:

– Әле һин улай итәһеңме, хәҙер мин һинең тетмәкәйеңде тетеп, үҙеңде калаға ебәртермен – гурыт Труйскийгә, гурыт Силәбенскийгә! – тип кыскырған.

Шунда ғына теге урыҫ эштеӊ ниҙә икәнен аңлап калған да тиҙерәк тая һалған быларҙан. Кейәүе менән карт:

– – һай, бештек урыҫты!– тип кайтып киткәндәр. Кайткас, йыйылып килгән халыкка карт, кейәүен мактап:

– Бына кейәүҙе урыҫка алып барғайным, һай, шәп һөйләште урыҫса! – мин әйткәнгә кымшанмай ҙа тора ине, ә кейәүем: "Был бит Йәҙгәр туғайы. Ә Йәҙгәр туғайы минең кайнатайҙың ере. Хәҙер колағыңа тондорам!" – тигәс, теге урыҫ шыр ебәрҙе.Аттарын йыя һалып, үксәһен ялтыратты, малайың!"– тип һөйләгән,ти.

# Йәнһары батыр

Фәйзулла карттың Мөхәммәтсадик тигән улы бар ине. Ул,француз яуында йөрөп кайткас, яуҙа күргәндәрен былай тип һөйләй торғайны.

Имеш, шул яуҙа Йәнһары тигән батыр ҙа катнаша. Ул шул тиклем көҙәтле була, аткан уғы ике кеше аша үтеп сыға икән бының. Буйы ике аршин ярымға етеп, яурынға ла ибәтәйһеҙ киң була. Һуғышканда, арыу-талыуҙы белмәй һуғыша. Кес яғынан - ат ни, ул ни! Яуҙа гел әҙерле-мәйәһен калдырмай йөрөтә был. Аткан уғы бер сакрымдан ары китә. Французлар каса башлаһа, берәһе лә касып котола алмай икән.

Шуға күрә батша уны бик мактап, кинәнесенән уға ла, башка батырҙарға ла бөтә нәҫел-ырыуығыҙға етһен, тип, оло ерҙәрҙе бүләк итә. Хатта Питырбурҙың үҙендә уларға һындарын койоп куйырға әмер бирә.

# Йәноҙак батыр

Йәноҙак батыр Йәнһары батырҙың улы була. Бер сак шулай был ике иптәше менән айыуға бара. Каршыларына айыу килеп сыккас, теге икәү быны ташлап каса. Йәноҙак бер үҙе айыу менән алышып кала. Айыу менән көрмәкләшә торғас, кушарлап айыу өңөнә барып төшәләр.

Теге икәү кайтып килһә, Йәноҙактың әсәһе быларҙан:

- Кайҙа калдырҙығыҙ баламды?- тип һорай икән.

- Уны айыу алып китте,- тиҙәр былар.

Йәноҙактың әсәһе шунда, хәнйәр алып:

- Йә баламды табығыҙ, йә үҙегеҙҙе һуям хәҙер!- тигәс, былар куркыштарынан кире урманға югерә. Айыу өңөнә килеп еткәс:

- Айыу бынан киткәндер инде,- тип лыбырҙашалар. Йәноҙак быларҙы ишетеп, айыу өңөнән:

- Йәноҙак тере әле!- тип кыскыра.

Былар Йәноҙакты алырға төшһә, Йәноҙак та тере, айыу ҙа әргәһендә ята икән. Айыу, моғайын, терелер, тип куркып торғанда, Йәноҙак быларға:

- Үлгән айыуҙан да куркып тормағыҙ инде!- ти.

Шунан былар айыуҙы һөйрәп сығаралар ҙа, тиреһен тунап, Йәноҙакты айыу майы менән тиреһенә урайҙар.

Йәноҙак һауыккас, тегеләр:

- Һәр кемгә үҙ майы - үҙенә дауа икән шул,- тип куялар.

# Токан батыр

Токан батыр көрәштә бик көслө була. Бөтә өйәҙҙә бер батыр ҙа уға каршы сыға алмай, сыкһа ла, уны ташлай алғандары булмай.

Был вакыт кантон башлығы булып Йолойәҙоң улы Абдулла тора. Кантон башлығы уны бер сак Уралдың теге /көнбатыш/ яғына алып китә. Ундағы бик бай кантон башлығының бик оҙон буйлы бер көрәшсеһе була: буйы өс аршинлык икән.

Ике кантон башлығы, бәхәскә керен, быларҙы көрәштермәксе булалар. Теге өс аршин батыр:

– Һин минең менән көрәшергә куркмайһыңмы ни?– тип һорағас, Токан батыр уға:

– Әҙәм балаһы әҙәм балаһынан куркмы, куркһа, аллаһынан ғына курка ул,– тип куя.

Шунан былар көрәшә башлайҙар. Бик оҙак көрмәкләшеп йөрөй торғас, Токан батыр был өс аршин әҙәмде күтәреп ала ла ергә атып бәрә. Тегеһе, сәмләнеп китеп:

– Әйҙә, яңынан көрәшәйек!– тип ныкыша.

– Йығылған көрәштән туймаç, тигәндәй, ир-егет бер көрәштә ике йығылмаç,– ти уға Токан. Ә теге өс аршин бының биленән алып:

– Әйҙә, көрәшәйек!– ти.

Ә кантон башлыктары:

– Икеһе лә ир-арыçлан былар – икеһе лә һәләк булып куйыр,– тип, батырҙарҙы сак айырып калалар.

Шунан теге өс аршиндың бик намыçы килеп, һигеҙ аршинлык бүрәнәне һөйрәп килтергән икән, Токан батыр бының бүрәнәһен күтәреп алған да ситкә ырғытҡан, ти.

Буйың өс аршин булһа ла, коро намыҫ менән генә булмай икән шул...

## Б а й ы ш

Борон Бөрйән-Таналык волосының Байыш ауылында Байыш тигән бер карт була. Шул Байышка мәсекәйҙәр килеп йөрөй икән. Быныӊ өй башында һәр сак ләүкегәнен күрәләр.

Бер сак шулай Байыш ауырып китә лә кинәт кенә донъя куя. Был хәлдән һуӊ бик мал-тыуар зыянлай, юғала башлай. Аптырауға калған ауыл халкы , был, моғайын, шул Байыш ломлоғолор, тип, күмәкләп быныӊ кәберен барып карамаксы була.

Барһалар, кәбер эсенә бер өӊ уйылып төшкәнен күрәләр, ә өӊ тирәһе ниндәйҙер ят тиҙәк менән сыбарланған икән. Шунан, үҙ-ара һөйләшәләр ҙә: "Әйҙә, кәберен асып карайык",- тигән уйға киләләр. Асып караһалар, ләхет аҫтында Байыш теп-тере һымак ята, ти. Бит алмалары ла кып-кыҙыл икән, ти. Шунан быны йөҙтүбән әйләндереп һалалар ҙа, калак һөйәктәре араһынан аркаһына имән каҙык кағып, ергә ләпәштереп куйлар.

Уны шулай яңынан күмеп кайткас, кына, мал-тыуарҙыӊ зыянлауы бөтөп, халык тын алып кала. Ауылдыӊ исеме ошо Байыш исеме менән аталған булған, тиҙәр.

Башкорт тарихы

Бер башкорттоң Барын менән Табын тигән ике улы була. Түңғатәр волысына караған Түңғатар, карт Муйнак, Балбык, Корама, Кәрим, Һөләймән, Һөйендек, Кесек, Мулдаш, Мулдакай, Илсеғол, Байрамғол, Юмай ауылдары ошо Барын ырыуынан килә. Ә Табын ырыуына Түләк, Малай-Муйнак,Кинжәкәй, Әпсәләм ауылдары карай.

Ә Кыуакандар беҙҙең ергә аҙак килеп ултырған ебәрелмеш ырыу /припущенниктәр/. Улар бында Залтауыс арьяғынан, үҙҙәренең Кыуаш /Катау?/ менән Һатны буйҙарындағы ерҙәрен Лубинин тигән алпауытка Һаткас кына килеп ултырғандар. Кыуакан ырыуына Шәрип, Ялсығол, Яҙнаш, Кажыр, Байрамғол ауылдары карай. Әйҙе ырыуы беҙҙә бары Кесек ауылында ғына. Улары ла ни бары утыҙ душ кына

Борон башкорт ерендә йылкы малы ла, һыйыр малы ла бик куп булған, ә һарык инде ер каплап йөрөгән. Итте умырып ашағандар Етен-тарма сәскәндәр. Етен талкып, еп иләгәндәр. Аякка сарык кейгәндәр. Урман өҫкә ауып торған. Бигерәк тә кайын, карағас, карағай шәп үҫкән.

Әле башкорттар йәшәгәнб был ерҙәр - борон-борондан ук башкорт ерҙәре. Башкорт халкы куп яуҙарҙа катышып килгәс, француздарҙы ла Мәскәүҙән кыуып сығарғас, беҙҙең батшабыҙ: "Һеҙ минән ни һораһағыҙ, мин һеҙгә шуны бирәм",- тигән. Беҙҙең яктың дүрт вулысы батшаға илселәр ебәреп, улар уға: "Беҙгә әле үҙебеҙ йәшәгән ерҙе үҙебеҙгә яҙ, ыштубы ла сит әҙәмдәр бында морон тығып йөрөрлөк булмаһын",- тигәндәр.

Был дүрт вулыс тигәнем шулар була инде: Барын-Табын, Тилеү-Табын, Тайман-Табын, Тәнсер-Табын. Батша был дүрт вулыска ошо ерҙәрҙе бирген: ерситтәре Оло Кыҙыл тамағынан алып, Оло Кыҙыл буйлатып, Урал һыртына барып сыккан, шунан Урал һырты буйлатып Ағиҙелгә барып төшкән дә унан ары - Әй Йылғаһына сығып, Әй Йыл

ғаһы буйлатып Миәс йылғаһына барып еткән, унан Миәс заутына ете сакрым етмәҫтән, аҫка боролоп, Миәс йылғаһы түбәненә буйлатып, Арғужа күленәсә барып еткән, Арғужа күленән Тиңгеҙ йылғаһына сыккан, Тиңгеҙ буйлатып Тубыл йылғаһына саклы барған да, Тубылды аша сығып, Йөбеләй татырлауығына саклы һуҙылған,унан ары Уркас күленә төшөп, Оло Кыҙыл тамағына кире әйләнеп кайткан. Бына ошо сиктәр эсендәге ерҙәр беҙҙең ер булыр.

Борон башкорт менән каҙак үҙ-ара тыныштмаҫ булған бит: каҙактар, башкорт еренә барымтаға сабып, башкорттарҙың күп мал-тыуарын әйҙәп алып китер булғандар; башкорттар ҙа кул каушырып ятмаған, каҙак еренә карымтаға барып, үҙҙәренең дә күп малын кыуып алып кайткандар. Каҙак яғынан да, башкорт яғынан да бик күп халык кырылған. Шуға күрә башкорт яғынан Таймаҫ тархан батшанан ике арала эленйә /линия/ төҙөүҙе һораған. Каҙактар ҙа был якка, башкорт еренә, сығып йөрөмәһен, шулай ук башкорттар ҙа ул якка, каҙак еренә, сығып йөрөмәһен, тип, шулай итеп, эленйә төҙелгән. Шунан, эленйә төҙелгәс инде, башкорттарҙы ла эленйә хеҙмәтенә ебәрә башлағандар.

Бығаса башкорттарҙың үҙҙәренең хәрби хеҙмәт кейеме булмаған Перовский башкорттарға үҙҙәренә айырым кейем - кара мундир тегергә әмер бирә. Бынан һуң генерал Неплюев мундирҙе кыҙылдан, салбарҙы каранан тектерергә куша. Ә башка кейергә бирйәндәр кейеп йөрөй торған калпак-кәпәс шәкелен алырға булалар.

Бер заман Таймаҫ тарханға бер нисә типтәр килеп, үгеҙ тиреһендәй генә ер һорай. Таймаҫ тархан былар һораған тиклем ер бирергә риза була. Тегеләр үгеҙ тиреһен кылдай итеп кенә телгеләйҙәр ҙ? әллә ни саклым ерҙе уратып та алалар. Таймаҫ тархан-

дың быға ғәрлеге килеп, был урындан тиҙерәк тая һала.

Шулай итеп, Таймаҫ тиклем тархан да тая икән шул.